# БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ЙЫРҘАРЫ ЙЫР-РИУӘЙӘТТӘРЕ

# БАШКИРСКИЕ НАРОДНЫЕ ПЕСНИ ПЕСНИ-ПРЕДАНИЯ

# BASHKORT FOLK SONGS SONGS-LEGENDS

# БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ЙЫРҘАРЫ ЙЫР-РИҮӘЙӘТТӘРЕ

# БАШКИРСКИЕ НАРОДНЫЕ ПЕСНИ ПЕСНИ-ПРЕДАНИЯ

# BASHKORT FOLK SONGS SONGS-LEGENDS

ӨФӨ
·КИТАП·

УФА
·КИТАП·

UFA
·KITAP·

1997

ББК 84 Баш
Б 29

Автор-төҙөүсеһе –
**Фәнүзә Нәҙершина**

*Тәржемәселәр:*
Юрий Андрианов,
Ғәзим Шафиков
*(башҡорт теленән руссаға)*

Айгөл Мөхтәруллина,
Зөһрә Рәхимова,
Римма Шәйбәкова
*(башҡорт теленән инглиз теленә)*

Автор-составитель –
**Фануза Надршина**

*Переводчики:*
Юрий Андрианов,
Газим Шафиков
*(с башкирского на русский язык)*

Айгуль Мухтаруллина,
Зухра Рахимова,
Римма Шайбакова
*(с башкирского на английский язык)*

Author-compiler –
**Fanuza Nadrshina**

*Translators:*
Yurii Andrianov,
Gazim Shafikov
*(from Bashkort into Russian)*

Aigol Mohtarullina,
Zohra Rahimova,
Rimma Shaibakova
*(from Bashkort into English)*

Б 29 Башҡорт халыҡ йырҙары, йыр-риүәйәттәре / Автор-төҙөүсеһе Ф. А. Нәҙершина. – Өфө, 1997. – 288 бит.

ISBN 5-295-02094-0

Өс телдә әҙерләнгән был йыйынтыҡҡа башҡорт халҡының боронғо ышаныуҙарға, тәбиғәткә бәйле йыр, йыр-риүәйәттәре, шулай уҡ тарихи ваҡиғалар, көнкүреш хәлдәре хаҡындағы йырҙары һәм йыр-риүәйәттәре индерелде. Тәржемәселәр халыҡтың үҙенсәлекле тормошона, тарихына ҡараған төшөнсәләрҙе – йырҙарҙың мәғәнәһен – мөмкин тиклем тулы килеш еткерергә тырышты.

Китап белгестәргә, юғары уҡыу йорттары һәм мәктәп уҡытыусыларына, ғөмүмән, киң ҡатлам уҡыусыларға тәғәйенләнә. Уны башҡорт мәҙәниәте менән ҡыҙыҡһыныусы сит ил белгестәренә лә файҙалы ҡулланма булыр, тип өмөтләнәбеҙ.

Сборник содержит башкирские народные песни, песни-предания мифологического, исторического, социально-бытового, любовно-лирического характера, а также – тексты на темы эпических сюжетов (на башкирском, русском и английском языках). Переводчики стремились донести до читателя точный смысл, сохранить историко-этнографические реалии текстов.

Рассчитан на специалистов, а также на широкий круг читателей.

This three – language edition contains Bashkort songs-traditions related to ancient beliefs, nature and historical events, as well as songs-legends. The translators tried to preserve the concepts and notions arising from the peculiarities of the mode of life and the people's history, i.e. to convey authentic meaning of the songs.

The book is intended both for experts and for the general reading public. We also hope it to be of interest for foreign learners of Bashkort culture.

Б $\frac{4505000000-85}{М121(03)-97}$ 213-97

ББК 84 Баш

ISBN 5-295-02094-0

© *Сост.*: Надршина Ф. А., 1997
© *Перевод:* Андрианов Ю.А.,Шафиков Г.Г. (*с башк. на русск.*),
Мухтаруллина А.Р.,Рахимова З.А.,Шайбакова Р.К. (*с башк. на англ.*),1997

# ЙЫРҘАРҘА — ХАЛЫҠ ТАРИХЫ

Көньяҡ Уралда йәшәүсе башҡорт халҡының рухи мәҙәниәтендә төп урынды йыр поэзияһы биләй тиһәк, моғайын, хата булмаҫ. Юғары сәнғәт кимәлендә халыҡтың милли характерын, уның ифрат бай эске донъяһын, фәлсәфәүи ҡараштарын сағылдырған йырҙар баһаларын бер ни менән дә билдәләп булмаған ҡиммәтле мираҫ ул. Йыр — кешеләрҙең көндәлек тормош юлдашы, уға әҙәм балаһы шатлыҡлы көндәрендә лә, ҡайғылы мәлдәрендә лә мөрәжәғәт итә, таяна. "Ел елләмәй томан асылмай, йыр йырламай күңел асылмай", — тип, юҡҡа ғына йырланмайҙыр.

Ата-бабаларыбыҙҙың тарихи хәтерен мәңгеләштереүҙә лә йырҙарҙың әһәмиәте әйтеп бөткөһөҙ. Уйлап ҡараһаң, күпселек йырҙарыбыҙҙың тәбиғәте образлы рәүештә тарих һөйләүгә, мәғлүмәт биреүгә "көйләнгән". Шуға ла былдай йырҙарҙы "йыр-риүәйәттәр", "йыр-легендалар" тип атарға була. Уларҙың сюжет-композиция төҙөлөшө риүәйәт (һирәклəберәк легенда) һәм йыр тексының органик бәйләнешенә нигеҙләнгән. Сюжеттың драматик көсөргәнешле урыны поэтик текст (йыр) һәм көй аша, ә ваҡиғалар үҫеше, геройҙың шәхесенә, эшмәкәрлегенә ҡағылған фекерҙәр сәсмә телмәр аша биреләусән.

Йыр-риүәйәт һәм йыр-легендаларҙың поэтикаһы, художестволы "йөҙө" уларҙың тәбиғәтенә бәйле ярала, йәғни һәр бер әҫәр ике жанрға — йырға һәм риүәйәткә, йырға һәм легендаларға хас сифаттарҙы эсенә ала. Теге йәки был йырҙың килеп сығышына бәйле ваҡиғалар ысынбарлыҡта булған хәл итеп һүрәтләнә. Борон заманда йәки элегерәк булған хәлдәрҙе лә, билдәле бер ерҙәге ваҡиғаларҙы, шәхестәрҙе һүрәтләгәндә лә уларҙың һис шикһеҙ ысынлығына ышандырырға ынтылып хикәйәләү риүәйәттәрҙең тәбиғи асылына ҡайтып ҡала. Хәл-ваҡиғаларҙың урыны, ваҡыты күп осраҡта төбәп күрһәтелә.

Ғәҙәттә, йыр-риүәйәттең, йыр-легенданың хикәйәләү өлөшө йырсы йәки ҡурайсы тарафынан йыр йырланыр алдынан, йә аҙағынан һөйләнелә. Һирәкләп йыр куплеттары араһында хикәйәләүгә күсеп китеү осраҡтары ла булғылай.

Әҫәрҙең музыкаль-поэтик өлөшө иһә геройҙың психологик хәлен, тойғо-кисерештәрен биреүҙә лә ҙур роль уйнай. Миҫал өсөн "Ғилмияза" йыр-риүәйәтенән Ғилмиязаның йыр-монологын алырға була.

Бала саҡта уҡ урланып, сит ерҙә көн иткән ҡыҙ бала яҙмышы, уның һағыштары, тыуған илен һағынып өҙгөләнеүҙәре йырҙа иҫ киткес юғары сәнғәт кимәлендә һүрәтләнгән:

Һаҡмар һыуы аға ла ҡибла табан,
Урал тауы буйлап та көн битләп.
Тыуған илкәйемә ҡайтыр ҙа инем,
Аяҡтарым талһа ла имгәкләп.

Йырҙың көйө — башҡорт халыҡ музыка сәнғәтенең классик үрнәктәренең береһе. "Бер күтәрелеп, бер түбәнәйә биреп, мәғәнәле паузаларға һәм контраст регистрҙарҙы ҡаршы ҡуйыуҙарға бай" был моң текстағы көсәргәнешле тойғоларҙы тетрәндергес юғарылыҡҡа күтәрә.

Дөйөм алғанда, художестволылыҡ йәһәтенән йыр-риүәйәттәр, йыр-легендалар ғәҙәти хикәйәгә ҡоролған сюжеттарҙан айырылыбыраҡ тора. Драматик, лирико-драматик яйға көйләнгән йыр тексы хикәйәләү өлөшөнөң дә шул яйға яҡынлашыуына күпмелер дәрәжәлә алшарт булып тора.

Булған хәл-ваҡиғалар эҙе буйынса билдәле бер тарихи шарттарҙа ижад ителгән әҫәрҙәр заманалар үтеү менән телдән-телгә күсеп килә торғас, һиҙелерлек үҙгәрештәргә дусар була: факттар алмашыныу, дәүерҙәрҙе бутау күренештәре фольклорҙа, шул иҫәптән йыр-риүәйәттәрҙә, шаҡтай йыш осрай. Шулай булған хәлдә лә йыр-риүәйәттәрҙә һүрәтләнгән ваҡиғаларҙың тарихи ерлеге ғәҙәттәге риүәйәт һәм легендаларға ҡарағанда нығыраҡ һаҡлана. Быны сәбәбе — әҫәрҙәге йыр тексының сағыштырмаса тотороҡло булыуына ҡайтып ҡала. Камиллашҡан шиғри форма (өҫтәүенә махсус көйө лә булһа), сәсмә телмәргә ҡарағанда һәр төрлө йоғонтоға аҡрыныраҡ бирелә. Әйтәйек, "Таштуғай", "Буранбай" кеүек атаҡлы әҫәрҙәрҙең сәсмә формалағы риүәйәт өлөшө төрлөсә вариантлаша. Ләкин тәрән мәғәнәле "Таштуғайҡай, һинең кәкүгең юҡ, үҙ Уралҡайыма ҡайтайым", йәки "Буранбайҙың яҙған хатын уҡып, зар илайҙар ауыл ҡарттары" кеүек юлдар һәр вариант өсөн тиерлек даими. Сюжет ойоштороуҙа, әҫәрҙең тарихын үҙенә "яҡын тотоуҙа" шиғри юлдарҙың роле ифрат ҙур. Поэтик тексты һөйләү һәм көйҙөң тығыҙ бәйләнеше аша бирелеүе халыҡ йырҙарына ғәжәйеп камил бөтөнлөк бирә, уларҙың бәсен һәм идея-эстетик ҡиммәтен күтәрә.

Әммә шуны ла билдәләргә кәрәк, синкретлыҡ — башҡорт халыҡ йыры йәшәйешенең берҙән-бер формаһы түгел, һәр йыр легендаһы йәки риүәйәтенән тыш, үҙ аллы ла башҡарыла ала. Һуңғы ваҡытта, нигеҙҙә, башҡарылыуҙың ошо рәүеше күҙәтелә.

Башҡарылыу рәүеше буйынса, башҡорт халҡының лиро-эпик, лиро-драматик һәм лирик йырҙары оҙон, һалмаҡ һәм ҡыҫҡа көйҙәргә бүленә[1]. Жанр формаларының үҙ-ара бәйләнеше һөҙөмтәһендә йыш ҡына аралаш структуралар (оҙон көйҙөң ҡыҫҡа көй менән үрелеп килеүе) хасил була.

Бынан тыш, башҡорт халыҡ ижадының милли музыкаль-поэтик системаһына эпик хикәйәттәрҙең көйҙәре, мөнәжәттәр, сеңләү һамаҡтары, бәйеттәр инә.

Шулай ҙа башҡорт халҡының милли музыка мәҙәниәтендә төп урынды оҙон көй биләй. Ул "башҡорт халҡының музыкаль-поэтик классикаһын"[2] тәшкил итә.

---

[1] Был йыйынтыҡҡа ингән йырҙарҙың көйҙәре буйынса бүленешен китаптың аҙағында бирелгән күрһәткестән ҡарағыҙ.

[2] *Лебединский Л. Н.* Башкирские народные песни и наигрыши. — М., 1962. 28-се бит.

Оҙон көйҙәр башлыса киң диапазонлы (дуодециманан алып, ике октаваға тиклем). Ҡайһы берҙәренең (мәҫәлән, "Буранбай") диапазоны хатта ике октаванан да артып китә. Оҙон көйҙө башҡарыу ифрат ҙур зауыҡ талап итә, сөнки оҫталыҡ көйҙө һуҙып йырлауға ғына ҡайтып ҡалмай, ә бәлки уның эске тотороҡлолоғон, интеллектуаль потенциалын (ә башҡорт йырҙарында ул көслө!) һаҡлай белеүгә бәйләнгән. Йырҙың тәрән моң-мәғәнәһен еткереү өсөн музыкаль биҙәктәрҙе урынлы ҡулланыу, һуҙынҡы өндәр (ноталар) менән ҡыҫҡа тауыштарҙы сиратлаштыра белеү маһирлығы кәрәк.

* * *

Халыҡ йырҙары мәғәнәүи йөкмәткеләре яғынан да күп төрлө. Йыйынтыҡта улар дүрт тематик төркөмгә бүлеп бирелгән: "Тәбиғәткә, боронғо ышаныуҙарға бәйле йырҙар", "Тарихи йырҙар", "Тормош-көнкүреш йырҙары, мөнәжәттәр", "Мөхәббәт, дуҫлыҡ йырҙары".

Тәүге бүлеккә тупланған йырҙарҙың бер өлөшө тарихтың бик боронғо осорҙарын, кеше аңының элекке торошон яҡтыртыуҙары менән әһәмиәтле ("Сыңрау торна", "Балаҡарға", "Кәкүк", "Турат сағылы", "Ҡара юрға", "Ҡуңыр буға" һ. б.). Ауыр бер мәлдә әҙәм балаһының тоҡомон ҡурғап, уға хәүеф килерен алдан "хәбәр" иткән, йә булмаһа сабыйҙы үлемдән ҡотҡарған изгелекле ҡоштар, үҙе тере саҡта хужаһын ырыҫынан яҙҙырмаҫ аҡ ҡанатлы толпар, сит ырыуҙан эйәһенә кәләш алып ҡайтҡан аҡыллы Ҡара юрға тураһындағы хикәйәләүҙәрҙең нигеҙе мифологик дәүергә барып тоташа. Улар ни тиклем генә һуңғы заман ваҡиғалары сорнамаһында бирелмәһен, әҫәрҙәрҙең нигеҙендә һалынған архаика барыбер үҙәктә ҡала. Сыңрау торналарҙың ҡурғаусы ҡош булып иҫәпләнеүе, шунлыҡтан башҡорттарҙың уларға табыныуы хаҡындағы мәғлүмәттәр, мәҫәлән, X быуаттың башына ҡараған Ибн-Фаҙлан яҙмалары буйынса билдәле: "Торналар — беҙҙең Раббыбыҙ: улар беҙҙең дошмандарыбыҙҙы ҡасырға мәжбүр итте", — тиҙәр башҡорттар, — шуға ла улар торналарға табына"[1].

Был йыйынтыҡҡа индерелгән легенда ла (ул XX быуат башында яҙып алынған) төп мотивы менән Ибн-Фаҙлан яҙмаларындағы мәғлүмәттәр менән ауаздаш: торналар бында ла яу килерен алдан иҫкәртеүсе, ҡурғаусы ҡош булараҡ сығыш яһай.

Торнаның табыныу ҡошо булыуына ишара яһаған этнографик материалдар ҙа бар. Үҫәргән ҡәбиләһенең бөтә дүрт ырыуы ла, мәҫәлән, торнаны үҙенең ырыу ҡошо итеп иҫәпләп, уны үлтереүҙе ҡәтғи рәүештә тыя[2].

Тиләү ырыуы башҡорттарының элек туй, мәжлестәр барышында "торна" бейетеү йолаһы шулай уҡ был ҡошто ырыу үрсетеүсе, кешеләргә ырыҫ килтереүсе йән эйәһе итеп ҡарауҙарына бәйле. Ҡош ҡиәфәтенә инеү таяҡҡа беркетелгән ағас торна башы һәм, эсен тышҡа әйләндереп, бейеүсенең иңенә һалынған аҡ толоп йәки тун ярҙамында атҡарылған.

"Балаҡарға" йыр-легендаһы шулай уҡ боронғо кешенең йәнлектәрҙе, ҡош-ҡортто изгеләштереп, уларға табыныуының эҙҙәрен һаҡлаған. Был сюжеттағы архаика "ҡош-әсә" мотивы менән генә сикләнмәй. Боронғо кешенең үҙен тәбиғәттән артыҡ айырмауы легенданың үҙгәрештәргә бик үк бирелмәгән

---

[1] *Ковалевский А. П.* Книга Ахмеда Ибн-Фадлана о его путешествии на Волгу в 921—922 гг. Статья, переводы и комментарии. — Харьков, 1956. 131-се бит.

[2] *Кузеев Р. Г.* Очерки исторической этнографии башкир. — Уфа, 1957. 1-се бүлек. 19—30-сы биттәр.

шиғри юлдарында яҡшы һаҡланған. Уларҙа тотемизмға хас булған кешенең йәнлеккә, йәнлектең кешегә әүерелә алыуы мотивы ла сағылып ҡалған:

...Балаҡайым, ғәзизкәйем,
Булғанһың бит балаҡарға, балаҡарға...

Баштарында изгелекле ҡош оялатҡан ағастар ҙа боронғо кешеләр аңында ҡәҙимге ағастар рәүешендә генә түгел, ә йән эйәләренең яралыу мөхите (яҫҡылығы), изге терәге булараҡ урын алған. Был күренеш бик күп халыҡтарҙың мифтарында, шул иҫәптән башҡорт фольклорында, шәжәрәләрҙә сағыла. Мәҫәлән, Ҡыпсаҡ ырыуы атамаһының барлыҡҡа килеүе тураһындағы риүәйәт-легендала нәҫел ебен башлаусы ир бала ағас ҡыуышында донъяға килә: "Кыпчаҡ юлда ағач ҡыуышында тыуғанлығы өчөн, аңа, үзләренең ғадәтенчә, "Кыпчак" дәйү ат вирмешләрдер. Ҡәдим төрөк телендә эче ҡыуыш ағачны кыпчак димешләр"[1].

"Балаҡарға" йыр-легендаһының боронғо ҡараштар юҫығында яралғанлығын иҫбатлаусы дәлилдәр эҙләгәндә йола фольклоры үрнәктәрен, атап әйткәндә, "Ҡарғатуй", йәки "Ҡарға бутҡаһы" байрамдарын да иҫтә тоторға кәрәк. Был байрам ваҡыттарында башҡарылған ритуаль бейеүҙәрҙе, әүһәләй уйындарын, ата-бабаларыбыҙҙы иҫкә алып, доға ҡылыуҙарҙы күҙаллағанда, "Ҡарғатуй" йолаһының сакраль мәғәнәһе йыл башын, уянған тәбиғәтте хөрмәтләп ҡаршы алыуға, ямғыр теләүгә генә ҡайтып ҡалмай, ә бәлки ата-бабалар рухын иҫкә алыуға ла бәйле булғанлығы тоҫмаллана. Боронғо кешеләр уйлауынса, тәбиғәт уянғанда ата-бабалар рухы ла уяна, ә ҡоштар иһә ата-бабалар рухын, йәнен йөрөтөүсе заттар. Йәнә шуныһы мөһим: тәү ҡарауға нисек кенә сәйер тойолмаһын, боронғоларҙың был ҡошто изгеләштереүе күпмелер дәрәжәлә тормош тәжрибәһенән килеп тыуған хәл. Һәр йыл яҙ башы менән ҡарғалар килеүе — кешеләр өсөн яҙ, йылылыҡ, уңдырыш килеүен аңлатҡан.

Халыҡ аңындағы төрлө ҡараштарҙың тыуыуын, уларҙың артабанғы яҙмышын өйрәнеү йәһәтенән "Сыңрау торна", "Балаҡарға" һәм шул типтағы башҡа йыр-легендаларҙың әһәмиәте ифрат ҙур. Айырыуса үҙҙәренең асылы менән бындай ҡомартҡыларҙың гуманистик йүнәлешле булыуы ҡиммәт. Тәбиғәт менән кеше берҙәмлегенең бөйөк фәлсәфәүи мәғәнәһен һәр быуын кешеләренә иҫкәртеп тороуҙа уларға тиң тағы нимә бар?

Заманалар үтеү менән үҙенең боронғо ерлегенә яңы дәүерҙәр һыҙатын да беректергән мәшһүр "Урал" йырының да тәү башлап ошо фәлсәфә нигеҙендә яралғанлығы күренә. Уралтауҙың тере йән эйәһе итеп һүрәтләнеүе (Ер-әсә мотивы) — шуға дәлил. Әлбиттә, йырҙарҙа һүрәтләнгән Уралтау образының мәғәнәһе бының менән генә сикләнмәй. Халыҡ аңына ул бигерәк тә Тыуған ил символын йөрөтөүсе булараҡ һеңеп ҡалған. Йырҙың йөкмәткеһенә ингән тарихи ваҡиғалар шаҙдауы шуның менән аңлатыла.

Башҡорт халҡының йыр поэзияһында тәбиғәткә арналған йырҙар ифрат күп. Ҡайһы төбәктә сығарылыуҙарына ҡарамаҫтан, уларҙың йөкмәткеләре оҡшаш йүнәлештә үҫкән: тәбиғәт матурлығына һоҡланыу, уны ололау, Ер-һыуҙы ата-бабаларыбыҙҙың изге төйәге, кешенең үҙе тыуып-үҫкән ғәзиз мөхите итеп ҡарау, төрлө сәбәптәр арҡаһында тыуған еренән, иленән айырылған, йә берәй фажиғә

---

[1] Башкирские шежере / Сост., перевод, введ. и коммент. Р. Г. Кузеева. — Уфа, 1960. 93-сө бит.

кисергән кешеләрҙең һағыш-тойғоларын сағылдырыу ("Һанайһары", "Ағиҙел", "Уйыл" һ. б.). Йырҙарҙың лирик геройы өсөн тәбиғәт — донъя, ғүмер, халыҡ яҙмышы тураһында фәлсәфәүи уйланыуҙар сығанағы, әҙәм балаһының рухын ныҒытыусы, хистәрен байытыусы илаһи бер мөғжизә, көс ("Һаҡмар", "Дим буйыҡайҙары", "Мәндем буйы").

XIX быуат аҙағында башҡорт йыр поэзияһын йыйған һәм өйрәнгән рус ғалимы С. Г. Рыбаков башҡорт йырҙарының фәлсәфәүи асылын билдәләп, түбәндәгеләрҙе яҙҙы: "Башҡорт йырҙарында ниндәйҙер бер айырыуса киңлек һәм иркенлек бар, уларҙа үҙенә бер төрлө гүзәллек һәм йыш ҡына хыялдағы ниндәйҙер билдәһеҙ нәмәгә ынтылыу һиҙелеп тора. Ғөмүмән, башҡорт йырҙарының йөкмәткеһендә тормош фәлсәфәһе элементы, әйләнә-тирәгә фәлсәфә күҙлегенән ҡарау мәйеллеге ҙур дәрәжәлә һиҙелә"[1]. Сергей Рыбаковтың был һүҙҙәре башҡорт оҙон көйҙәренең һәр ҡайһыһына ҡағыла тиерлек.

**Тарихи йырҙар** бүлегендә тупланған әҫәрҙәр, башлыса, реаль ерлеге аныҡ булған ижтимағи йүнәлешле ваҡиғалар һәм төрлө дәүерҙәрҙә йәшәгән тарихи шәхестәргә бәйләп ижад ителгән. Ул йырҙарҙың, йыр-риүәйәттәрҙең күпселеге тыуған ер һәм уны сит ил баҫҡынсыларынан һаҡлау, ил эсендәге ғәҙелһеҙлектәргә, милли һәм синфи иҙеүгә ҡаршы көрәш идеяларын сағылдыра.

Азатлыҡҡа һыуһау айырыуса Рәсәй батшалығының колониаль сәйәсәтенә ҡаршы сығарылған фольклор әҫәрҙәрендә асыҡ күренә. Йырҙарҙан аңлашылыуынса, һатып алыу һылтауы менән башҡорт ерҙәренең таланыуы урындағы халыҡты аяныслы яҙмышҡа, ауыр кисерештәргә дусар иткән:

...Ямантауға инде барып булмай:
Тирә-яғы кордон-ҡарауыл.
("Ямантау-Йәмәлекәй тауы")

...Шарлы урманҡайҙары ҡулдан киткәс,
Үлмәйенсә бөтмәҫ көйөгө.
("Шарлы урман")

Башҡорт халҡы таланыуға, алданыуға ҡаршы ризаһыҙлыҡ тойғоһо белдереп кенә ҡалмаған, яуға күтәрелгән: XVII—XIX быуат араларында береһе һүндерелеүгә икенсеһе тоҡанып өлгөргән башҡорт ихтилалдары, айырыуса 1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы нәҡ ана шул хаҡта һөйләй.

Батша тәхетен тетрәткән Крәҫтиәндәр күтәрелешендә башҡорт халҡының данлы улы Салауат Юлаев үҙен азатлыҡ хәрәкәтенең иң күренекле шәхестәренең береһе һәм Емельян Пугачевтың тоғро көрәштәше итеп танытты. Салауаттың юлбашсылыҡ ролен хатта Крәҫтиәндәр һуғышының дошмандары генерал-майор П. С. Потемкин, генерал-аншеф П. И. Панин танырға мәжбүр булған: улар үҙҙәренең хаттарында, донесениеларында Салауатты "данлы Салауат", "иң төп боласы" ("главнейший бунтовщик"), "үткән болаларҙың төп юлбашсыһы" ("главный предводитель минувшего бунта") тип баһалайҙар. П. С. Потемкин Екатерина II-гә яҙған бер донесениеһында: "Салауаттың исеме ысынлап та башҡорт хал-

---

[1] *Рыбаков С. Г.* Музыка и песни Уральских мусульман с очерком их быта. — СПб, 1897. 121-се бит.
[2] Крестьянская война 1773—1775 гг. на территории Башкирии. Сборник документов. — Уфа: Башкнигоиздат, 1975. 262, 264—265-се биттәр.

ҡының йөрәгендә булырға хаҡлы"[2], — тип танырға мәжбүр булған. Батша генералы хаталанмаған: яуғир-шағир Салауаттың исеме йырҙарҙа, ҡобайырҙарҙа, күп һанлы риүәйәттәрҙә мәңгеләштерелгән. Был йыйынтыҡта бирелгән ике йырҙың тәүгеһе батырҙың үлемһеҙ эшенә дан йыры булып яңғыраһа, икенсеһе — ирек өсөн көрәшкән оло шәхестең тотҡонға эләгеүенә бәйле халыҡ йөрәгендә барлыҡҡа килгән уңалмаҫ яра хаҡында бәйән ҡыла.

Изгелекле ҡасҡындар, һөргөнгә ебәрелгән кешеләр, кантон башлыҡтары тураһындағы йырҙарҙың нигеҙендә лә социаль тигеҙһеҙлек, йәмғиәттәге ғәҙелһеҙлек мотивтары ята ("Бейеш", "Буранбай", "Төхфәт кантон").

Тарихи йырҙарҙың икенсе тармағы — сит ил баҫҡынсыларына ҡаршы көрәш темаһын сағылдырған йырҙар. Уларҙа һүрәтләнгән ваҡиғаларҙың хронологик диапазоны шаҡтай киң: XVI—XVIII бб. ҡаҙаҡ, ҡалмыҡ барымталары, XIX—XX быуаттарҙағы һуғыштар (француз яуы, рус-төрөк, рус-япон һуғыштары). Күпселек йырҙарҙың нигеҙендә башҡорттарҙың рус ғәскәре эсендә төрлө һуғыштарҙа, хәрби походтарҙа ҡатнашыу ваҡиғалары ята.

Халыҡ хәтерендә айырыуса 1812 йылғы Ватан һуғышы дәүеренә ҡараған йырҙар, йыр-риүәйәттәр яҡшы һаҡланған. Француз яуы хаҡындағы йырҙар азатлыҡ көрәшенә дәррәү күтәрелгән халыҡтың илһөйәрлек тойғоларын үҙәккә ҡуйыуҙары менән айырылып тора. ("Икенсе әрме"[1], "Эскадрон", "Ҡаһым түрә", "Ерән ҡашҡа"). Уларҙағы рухи күтәренкелек, ҡаһарманлыҡ аһәңе башҡорттарҙың 1812 йылғы Ватан һуғышында уйнаған ҙур роленә бәйле. Билдәле булыуынса, Наполеон ғәскәрҙәренә ҡаршы һуғышта башҡорт атлыларынан егерме һигеҙ полк төҙөлгән, һәм уларҙың күбеһе Кутузов етәкселек иткән рус армияһы составында Данциг, Лейпциг, Париж һәм башҡа ҡалалар янындағы һуғыштарҙа ҡатнашҡан. Французлар башҡорт һуғышсыларын мәргәнлектәре өсөн "төньяҡ амурҙары" тип атаған[2].

Йыр поэзияһының ҙур бер өлөшөн **тормош-көнкүреш тураһындағы йыр, йыр-риүәйәттәр** тәшкил итә. "Саф" тарихи йөкмәткеле әҫәрҙәр иҫәбенә инмәһәләр ҙә бындай йырҙарҙың нигеҙендә лә ысынбарлыҡ, заман һулышы ярайһы уҡ яҡшы тойола. Айырым шәхестәрҙең тормошо аркылы йәмғиәттең социаль торошон тасуирлау — был төркөм йырҙарҙың бөтәһе өсөн дә хас күренеш. Уларҙан аңлашылыуынса, феодаль-патриархаль мөнәсәбәттәр тыуҙырған йәшәү шарттары ҡатмарлы, геройҙарҙың, айырыуса ҡатын-ҡыҙҙың, яҙмышы еңелдән түгел ("Таштуғай", "Зөлхәбирә", "Мәхүбә" һ. б.). Ғәҙел булмаған ижтимағи тәртиптәргә, йола, ғөрөф-ғәҙәттәргә ҡарата ризаһыҙлыҡ белдереү мотивы йыр-риүәйәт геройҙарының эштәре, ҡылыҡтары аша еткерелә ("Аҡ ҡарсыға — Яйыҡ", "Таштуғай").

**Мөхәббәт темаһына** бағышланған йырҙар тәрән лиризм менән һуғарылған. Егет менән ҡыҙ күңелендәге гүзәл тойғоларҙы һүрәтләүҙә ғәжәйеп матур поэтик биҙәктәрҙең моңло көй менән оҙатылыуы мөхәббәт йырҙарына ҡабатланмаҫ нәфислек бирә. Бигерәк тә ҡыҙҙар матурлығын тасуирлауҙа фольклор ижадсыларының фантазияһы сикһеҙ ("Хан ҡыҙы", "Сәлимәкәй"). Мөхәббәт тигән төшөнсәнең бөйөклөгөн аңлаған лирик геройҙың рухи юғарылығы, хистәренең сикһеҙ тәрәнлеге йырҙа бына нисек итеп әйтеп бирелгән:

---

[1] Башҡорт халыҡ ижады: Риүәйәттәр, легендалар. Т. II / Төҙ., инеш мәҡәлә һәм аңлатмалар авт. Ф. А. Нәҙершина. — Өфө: Китап, 1997. 236—240-сы биттәр.

[2] *Асфандияров А. З.* Участие башкир в войнах и походах России в период кантонного управления (1798—1865 гг.) // Из истории феодолизма и капитализма в Башкирии. — Уфа, 1971. 82, 86-сы биттәр.

Күктә генә болот, ай, йөрөйҙөр,
Ерҙә генә ҡырау ирейҙер.
Йөрөмәсе, йәнем, күҙ алдымда:
Күҙ алмаҡайҙарым ирейҙер.

Был йырҙы тыңлағанда, ирекһеҙҙән шағир һүҙҙәре хәтергә килә:

Халыҡтан да бөйөк композитор,
Халыҡтан да бөйөк йырсы юҡ...

Йырҙарға шиғри камиллыҡ, нәфислек биргән сәнғәт алымдарына туҡталыу был мәҡәләнең бурысына инмәй. Башҡорт халҡының йыр поэзияһы тураһында дөйөм мәғлүмәт биреп, айырым әҫәрҙәрҙең тарихи ерлегенә аңлатма бирелде. Йыйынтыҡтың үҙенсәлеге, йәғни сит ил уҡыусыларына ла тәғәйенләнеше, нәҡ ошо йүнәлештә фекер йөрөтөүгә алшарт булып торҙо.

Һүҙҙе йомғаҡлап, шуны әйтергә ҡала: башҡорт халыҡ йырҙары – баһалап бөткөһөҙ рухи хазиналарҙың береһе, быуаттар төпкөлөнән хәҙерге заманғаса килтерелеп еткерелгән ата-бабалар аманаты, поэтиклаштырылған халыҡ тарихы. Шул уҡ ваҡытта был мираҫ башҡорт халҡының дөйөм кешелек мәҙәниәтенә индергән ғәжәйеп үҙенсәлекле өлөшө лә.

Ошо китапты әҙерләгән ижади коллективҡа, нота яҙмаларын һайлағанда консультация биргән музыка белгесе Гөлназ Галинаға, шулай уҡ инглиз теленә тәржемә ителгән күп кенә текстарҙы редакторлаған доктор Артур Вильямсонға (Төньяҡ Ирландия, Ольстер университеты) оло рәхмәтемде белдерәм.

**_Фәнүзә Нәҙершина,_**

_филология фәндәре кандидаты,_
_Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев_
_исемендәге дәүләт премияһы лауреаты_

# В ПЕСНЯХ - ИСТОРИЯ НАРОДА

В духовной культуре башкир, коренных жителей Южного Урала, выдающееся место наряду с эпосе (кубаирами) занимают песни. В них в наиболее совершенной форме выражены национальный характе народа, высокая музыкально-поэтическая одаренность.

Определяя характер отношения башкирской народной песни к действительности, исследователи h раз отмечали ее глубокий историзм. Сама художественная природа большинства песен как бы "специальь настроена" на передачу исторической информации. Сюжетно-композиционный строй песен, как лиро-эпиче' ких, так и лирических, базируется на органической связи песенного текста и предания или легенды. Певць хорошо знающие исполнительские традиции, перед тем как спеть народную песню, вначале подроби излагают историю ее зарождения. В рассказе исполнителя весьма определенно проявляется установка н достоверность описываемых событий. Музыкально-поэтическая часть несет высокую эмоциональную на рузку, выражает психологическое состояние, чувства и переживания героя. Гармоничная связь поэтическог текста и мелодии, данная в сочетании с повествовательной речью ("историей"), придает удивительну} целостность народной песне, усиливает степень ее весомости и эстетического воздействия. Однако следуе отметить и то, что синкретичность - не единственная форма бытования башкирской народной музыки: каж дая отдельно взятая песня может исполняться и самостоятельно.

В музыкальном плане башкирские народные песни разделяются на долгую протяжную песню (узун кюй), умеренно-протяжную (халмак-кюй) и короткую песни (кыска-кюй)[1]. Как результат взаимосвязи и взаимо действия жанровых форм возникают также смешанные структуры (сочетание протяжной мелодии с короткой)

Кроме того, в музыкально-поэтической системе башкирского народного творчества - напевы эпических сказаний, мунажатов[2], обрядовых причитаний, произведений балладного типа - байтов...

Ведущее положение в народной музыкальной культуре башкир занимает протяжная песня - узун-кюй - "башкирская народная музыкально-поэтическая классика"[3].

[1] Классификация включенного в настоящий сборник материала отражена в указателе, помещенном в конце книги.
[2] *Мунажат* - духовный стих.
[3] *Лебединский Л. И.* Башкирские народные песни и наигрыши. - М., 1962. С. 28.

Протяжную песню отличает широкий диапазон, от дуодецимы до двух октав (в отдельных случаях и больше: например, "Буранбай"). Многие узун-кюй богато орнаментированы. Красота, совершенство мелодического рисунка зависят от мастерства исполнителя, от его искусства к импровизации[1].

Народные песни многообразны и по своей тематике. Собранные воедино и приведенные в определенную систему они представляют как бы единое, крупноплановое, полисемантическое произведение, при изучении которого проливается свет на самые глубинные корни истории народа.

Особенно характерны в этом плане сюжеты о птицах - чудесных покровителях людей ("Журавлиная песнь", "Грачонок"), крылатом коне-тулпаре ("Косогор гнедого коня"), "разумном" иноходце, добывающем невесту эпическому герою ("Вороной иноходец"), и т. п. Бытующие ныне песни-легенды, хотя и передаются на фоне позднейших наслоений, донесли до нас отзвуки мифологических представлений.

Примечательны сведения (свидетельства) Ахмеда Ибн-Фадлана о верованиях башкир: "Мы видели, как (одна) группа поклоняется змеям, (другая) группа поклоняется журавлям *(подчеркнуто нами. - Ф. Н.),* и мне сообщили, что они (некогда) вели войну с одним народом из числа своих врагов, что они (враги) обратили их (башкир) в бегство и что журавли закричали сзади них (врагов) так, что они испугались и сами были обращены в бегство,... и поэтому они (башкиры) поклоняются журавлям и говорят: "Это (журавль) наш господин [Раббы-божество. - *Ф.* /-/.], так как он обратил в бегство наших врагов", и поэтому они поклоняются им (и теперь)"[2]. Со сведениями Ахмеда Ибн-Фадлана созвучна по своему основному мотиву и легенда "Журавлиная песнь" (запись начала XX вв.), публикуемая в настоящем сборнике: птицы и здесь выступают чудесными покровителями башкир, "предупреждая" их о надвигающейся военной опасности.

Имеется ряд этнографических данных, свидетельствующих о культе журавля среди башкир. Например, все четыре рода племени усерген и поныне считают журавля своей родовой птицей и запрещают ее убивать[3].

С древнейшими тотемическими воззрениями связаны, на наш взгляд, и ритуальные журавлиные танцы, бытовавшие до недавнего времени в юго-восточном Башкортостане среди башкир рода теляу. Они исполнялись во время свадеб и других празднеств: согласно поверьям, "участие" родовой птицы в дни важнейших событий в жизни людей способствовало жизнестойкости рода, его благополучию в будущем.

Обрядово-магическую функцию, направленную на "отпугивание" врага, "отвод" беды выполняли, возможно, и журавлиные пляски, исполняемые в условиях войны. На эту мысль наталкивает наличие признаков обрядности в структуре танца (деревянные пластинки, привязываемые к большому и указательным пальцам, имитирующие клюв), а также бытование разного рода суеверных представлений о журавлях (как было сказано выше, мотив отпугивания известен еще по заметкам Ибн-Фадлана).

Следы тотемических воззрений наблюдаются также в песне-легенде "Грачонок", где, кроме мотива "птица-мать", сохранен мотив оборотничества (вера в возможность превращения человека в птицу и наоборот):

[1] Подробно о музыкальной стороне башкирских народных песен см. в указанной выше книге Л. Н. Лебединского: с. 28-47.

[2] *Ковалевский А. П.* Книга Ахмеда Ибн-Фадлана о его путешествии на Волгу в 921-922 гг. Статья, переводы и комментарии. - Харьков, 1956. С. 131.

[3] *Кузеев Р.* Г. Очерки исторической этнографии башкир. -Уфа, 1957. Ч. 1. С. 79-80.

...Ты ведь нашим был ребенком,
Но потом ты стал грачонком...

Необычными в представлениях древних людей были и деревья. Согласно мифам многих народов, гнездо и дерево рассматривались в единстве (входили в единый комплекс), сакральное значение имело дупло, ассоциируемое в сознании древних с материнской утробой. Далекие отголоски этих воззрений мы слышим в "Грачонке", а также в генеалогической легенде о происхождении племени Кыпсак: "...Так как Кыпчак родился в пути, в дупле дерева, ему по своему обычаю дали имя "Кыпчак". На старом тюркском языке дуплистое дерево называют кыпчак"[1].

Когда речь идет об архаических корнях песни-легенды "Грачонок", следует помнить и о весеннем празднике Ҡарғатуй" ("Грачиный праздник") или Ҡарға бутҡаһы" ("Грачиная каша"), в основе которого лежат древние верования, связанные с культом тотемических предков, идеей умирающей и воскресающей природы. Трапеза, "угощение" обрядовой пищей грачей, ритуальные пляски, игры, вызывание дождя, моленья в честь умерших сородичей на лоне природы - яркое тому свидетельство.

В изучении верований, их эволюции значение "Журавлиной песни", "Грачонка" и других сюжетов подобного типа исключительно велико. Особенно важно понимание их гуманистической сути, глубокого философского смысла. Эти произведения пронесли через века священность идеи бережного отношения к природе, ко всему живому, что окружает человека.

Мысль о нерасторжимости единства человека и природы заложена в сущности и в ранних вариантах песни "Урал", в которых опоэтизирован образ матери-Земли. В целом же образ Уралтау в песнях многообразен. Он олицетворят в себе и природу как таковую, и понятие Родины целого народа.

В музыкальном творчестве башкир немало песен с региональными топонимическими названиями. Независимо оттого, где они создавались, их объединяют общие, схожие мотивы: описание красот природы, трепетное отношение к своему краю как к месту, где родились и жили предки; чувство тоски по Родине, если человек по разным причинам вынужден жить на чужбине ("Ханайхары", "Агидель", "Уйыл" и др.).

Для лирического героя песен природа - источник философских раздумий о жизни, о судьбе народа, божественная сила, укрепляющая дух человека, обогащающая его чувства ("Хакмар", "Долины Демы", "Долины Мандема").

Говоря о философичности башкирских народных песен, представляется уместным вспомнить высказывание известного собирателя музыкального фольклора башкир в конце XIX в. С. Г. Рыбакова: [башкирские народные песни] "музыкальны, эффективны и дышат какой-то особенной ширью и размашистостью; веет от них своеобразной прелестью и чувствуется стремление к чему-то неопределенному, мечтательному... В общем в содержании башкирских песен заметен элемент житейской философии, склонность к философским взглядам на вещи"[2]. Эти слова относятся ко всем песням, в т. ч. мелодиям, посвященным природе.

Большую тематическую группу составляют собственно исторические песни, песни, отражающие реальные события общественного значения в народном осмыслении. В центре этих песен находятся события, связанные с защитой Родины от внешних врагов, и борьбой башкирского народа за национальную социальную свободу.

[1] Башкирские шежере /Сост., перевод, введ. икоммент. Р. Г. Кузеева. - Уфа, 1960. С. 93.
[2] *Рыбаков С. Г.* Музыка и песни уральских мусульман с очерком их быта. - СПб., 1897. С. 121.

Тема национального гнета особенно ярко выражена в песнях о расхищении башкирских земель русскими заводчиками под предлогом "купли". Они воссоздают ужасающую картину бедственного положения обманутых башкир, их тяжелое психологическое состояние:

... Шарлы урман вовеки не забыть,
До самой смерти горя не избыть.
("Шарлы урман" - "Лес Шарлы")

... К Ямантау теперь не подойти:
Все вокруг - кордон да караул.
("Ямантау" - "Ямаликай гора")

Строки этой же песни из другого варианта:

Когда узнали о продаже мы,
Рыдали все, рыдал весь наш аул[1].

Многочисленны песни, песни-предания, повествующие о борьбе башкир против колониальной политики царизма. Видное место среди таких произведений занимают песни о Крестьянской войне 1773-1775 гг. В данную книгу мы включили лишь два образца песен о национальном герое башкирского народа, поэте Салавате Юлаеве. Увековечение имени батыра в народной памяти связано с его исключительной ролью в освободительной борьбе. Даже враги Крестьянского движения генерал-майор П. С. Потемкин, генерал-аншеф П. И. Панин в своих донесениях к Екатерине II вынуждены были признать Салавата Юлаева "главным предводителем минувшего бунта", назвали его "славным Салаватом"[2].

Мотивы недовольства общественными порядками, социальным неравенством отражены в песнях-преданиях о беглецах, кантонных начальниках ("Бииш-батыр", "Буранбай", "Тухфат-кантон").

Весьма значителен пласт исторических песен о борьбе с внешними врагами. Хронологический диапазон изображенных в них событий довольно широк: набеги казахов и калмыков в период XVI—XVIII вв., войны XIX-XX вв. (Отечественная 1812 г., русско-турецкая, русско-японская).

В памяти народа особенно хорошо сохранились песни об Отечественной войне 1812 г. В них весьма ярко отразился патриотический подъем, охвативший народные массы ("Вторая армия"[3], "Эскадрон", "Кахымтуря", "Ерян-кашка"-"Рыжий конь со звездочкой на лбу").

Героический пафос этих песен, песен-преданий связан со значительностью участия башкир в Отечественной войне 1812 г. Тогда было сформировано 28 башкирских конно-казачьих полков. Башкирские конники сражались под Данцигом, Лейпцигом, Веймаром, Ганау, Шатобрианом и Парижем. Французы прозвали башкир за меткость стрельбы из луков "северными амурами"[4].

[1] Башкирское народное творчество. Т. 8: Песни / Сост., авт. вступ. ст. и коммент. С. А. Галин. - Уфа, 1995. С. 44 (перевод Д. Даминова).

[2] Крестьянская война 1773-1775 гг. на территории Башкирии: Сборник документов. -Уфа: Башкнигоиздат, 1975. С. 262, 264-265.

[3] Башкирское народное творчество. Т. 2: Предания и легенды. / Сост., авт. вступ. ст. и коммент. Фануза Надршина. -Уфа, 1987. С. 289-293.

[4] *Асфандияров А. 3.* Участие башкир в войнах и походах России в период кантонного управления (1798-1865 гг.) //Из истории феодализма и капитализма в Башкирии. -Уфа, 1971. С. 82-86.

2*

Содержательны, исторически достоверны песни, песни-предания, в которых повествуется о событиях, связанных со старинным бытовым укладом и обычаями башкир. Характеры героев проявляются здесь в драматических обстоятельствах, обусловленных феодально-патриархальными отношениями. Несмотря на то, что конфликт в бытовых песнях отражен преимущественно сферой семейной жизни, их направленность против несправедливых общественных порядков, обычаев выражена довольно четко ("Таштугай", "Зульхабира", "Белый ястреб - Яик" и др.).

Глубоким лиризмом проникнуты любовные песни. Удивительная гармония поэтического текста и задушевной мелодии придает этим песням неповторимое великолепие, порою поднимая их до уровня музыкально-поэтических шедевров ("Салимакай", "Кукушечка"). Творческая фантазия носителей фольклора особенно сильна в создании образа любимой девушки, описании ее красоты ("Салимакай", "Ханская дочь").

Какую возвышенность духа, глубину чувств должен иметь лирический герой песни, понявший великий смысл любви и способный выразить это чувство словами, которые фактически не поддаются никакому переводу на другой язык:

Йөрөмә лә, йәнем, күҙ алдымда,
Күҙ алмаҡайҙарым ирейҙер.

Приблизительно можно сказать только так:

...Ой, не ходи, родная, перед глазами,
Мой взор твоя краса огнем палит.

Раскрыть художественную природу башкирских народных песен в пределах вступительной статьи невозможно. Такая цель перед нами не ставилась. Характер сборника - его предназначенность и иноязычному читателю - обусловил круг вопросов, затронутых выше.

В заключение хочется подчеркнуть, что песни, песни-предания являются одним из бесценных достояний, представляющих своеобразное, накопленное веками культурное наследие башкирского народа. В то же время это наследие - самобытный вклад в общечеловеческую культуру, который внесен нашими отцами и дедами и бережно хранится их потомками.

Выражаю глубокую благодарность творческому коллективу, работавшему над этой книгой, музыковеду Гульназ Галиной за консультацию при подборе нотных материалов, а также искреннюю признательность доктору Артуру Вильямсону (Ольстерский университет, Северная Ирландия) за редактирование части переводов на английский язык.

*Фануза Надршина,*
*кандидат филологических нау*
*лауреат Государственной преми*
*им. Салавата Юлаева*
*Республики Башкортоста*

# THE SONGS AT THE HEART OF THE BASHKORT PEOPLE

Perhaps it won't be a mistake to say that song poetry occupies the main place in the spiritual culture of the Bashkorts, the people inhabiting the South Urals. 'Song Poetry' implies a broader meaning in this context, i. e. we mean epic narratives, glorifying heroes (batyrs), valour, justice and grandeur; the first among them is the famous 'Ural Batyr'. This great invaluable heritage is composed of epic songs, poems, rendering at a high artistic level the peculiarities of national character, philosophical outlooks and spiritual life of the Bashkorts. Songs accompany people in their everyday life, in joy and in trouble, bringing hope and consolation. As the lyrics of a song go: 'The fog doesn't lift until the wind blows, the people's spirits don't rise until they sing a song'.

It should also be mentioned, that it is mainly songs that serve to keep the memory of our ancestors fresh from generation to generation. On reflection, the nature of most Bashkort songs is 'tuned' to convey the historical background in an image-bearing way. Therefore, such songs are called 'songs-traditions' and 'songs-legends'. Their compositional forms and plot structure depend to a great extent on the organic unity of the lyrics of the song and the narrative part of the song - a certain story, tradition or, less frequently, a legend. The crucial points of the plot development are usually interpreted through the lyrics of the song and its tune, whilst the viewpoints on the protagonist's personality and his activity are conveyed through the narrative.

The poetic and artistic images of songs-traditions and songs-legends arise from their nature, i. e. each one comprises the features inherent to both genres: songs and traditions (legends). The events which have given birth to this or that song are depicted as real and non-fictitious. This peculiar feature of traditions to render facts as actual is most clearly observed in the narration of the bygone events, which occurred at a certain place and period of time, and also in the portrayals of historical figures. The place and the time here are deliberately stressed.

Normally the narrative part of the song-tradition or the song-legend is performed by a singer or a kurai-player, either before the song itself or after it. Sometimes, however, the narration is introduced between the couplets of the song.

Verse and music play the major part in revealing the character's state of mind and his intense emotional life. For illustration we'll turn to the song-monologue of the heroine of the song-tradition 'Ghilmiyaza'. It represents at an artistic height the anguish of the homesick girl, who was kidnapped as a child and was dentined to live in a strange land, far from home.

The Hakmar runs its waters towards qiblah
On the sunny side of the Ural ridge.
I wish I could return to my beloved motherland,
If my feet wore out, I would keep crawling.

The tune of this song is regarded as a classic of Bashkort folk music. This melody 'abundant in rises and falls, meaningful pauses and contrasting registers...' lets the intense emotional powers of the lyrics reach the utmost height.

Generally, in an artistic sense, the songs-traditions and the songs-legends are distinct from the plots of common stories. The dramatic or lyrico-dramatic part of the song, the verse, affects to a certain extent the narrative part.

The literary works created after certain historical events traced to the times of old, undergo considerable changes with the passing of time: the mixing-up of facts, the substitution of historical periods - the phenomena occurring frequently in folklore, including the songs-traditions. Despite this, the historical background of the depicted events is better preserved in songs-traditions than in common traditions and legends due to a relatively fixed structure of the lyrics. The perfectly arranged poetic lines of a song (especially when matched with the tune) are less submitted to alterations than the narrative. Such renowned pieces of folklore as Tashtughai' and 'Buranbai' vary considerably in their narrative parts. As for the meaningful lines, Tashtughaikai, there is no cuckoo to be found here. I wish I could go back to my own Urals', or 'When reading letters sent by Buranbai, so bitterly were crying our old folks', they remain invariable in all those versions. The poetic form plays an important part in arranging the plot-structure of a literary work as well as in keeping the historical background "attached" to it. The harmonious unity of poetic texts and tunes provides an amazingly perfect integrity of folk songs, and adds to their worth and ideo-aesthetic value.

At the same time it should be mentioned that syncretism is not essentially inherent to the Bashkort folk songs. Each song can be performed separately from its legend or tradition, and recently this way of performing has been observed most frequently.

According to their way of performing Bashkort folk lyrico-epic, lyrico-dramatic and lyric songs are subdivided into extended tunes, moderate tunes and short tunes. Very often the interrelations of the genres result in the appearance of mixed forms (extended tunes interwoven with short ones).

Besides these forms the national musical system of Bashkort folklore is represented by tunes of epic narratives, monazhats (religious verse set to music), lamentations and 'baiets' - ballad-type forms. But on the whole, the Bashkort national musical art is predominated by extended tunes, which-are 'the classical expression of the musical-poetic system of the Bashkort people'[1]. Most of the extended tunes are of wide range (from duodecimo to two octaves). Some of them have a range even exceeding two octaves ('Buranbai'). Undoubtedly, it requires great talent and grace to perform extended tunes, for apart from the skill of drawing the tune out long enough, one should possess the ability to preserve the inner integrity of the song along with its intellectual potential (so much characteristic of Bashkort songs). Besides, the performer should be skilled enough to arrange the musical pattern of the song and the succession of long and short sounds in such a way as to convey most impressively the depth of both the meaning and the "soul" of the song.

' Bashkort folk songs also vary greatly in their subject-matter. In the present collection they are respectively subdivided into four parts: 'Songs Related to Nature and Ancient Beliefs', 'Historical Songs', 'Songs on Everyday Life, Monazhats', 'Love and Friendship Songs'.

*Лебединский Л. Н.* Башкирские народные песни и наигрыши. - М., 1962. С. 28.

The songs comprising the first part, represent the ancient times and man's state of mind at that time: The Singing Crane', The Babyrook', The Cuckoo', The Bay Horse Hillside', 'Kara-Yurgha', The Brown Cow'. The images of merciful birds who in the rough times 'warned' people of an impending disaster or saved a child from death, and the notions of the white-winged 'tolpar' horse who helped his master through his seek of happiness, or the sensible Kara-Yurgha who brought his master a bride from a far-off tribe - are, undoubtedly, based on the mythological consciousness of ancient people. Such narratives, though imbued with modern associations, preserve archaic elements in their core. The singing cranes were regarded by the Bashkorts as miraculous patrons of people, as sacred birds. This is clearly seen from the writings of Ibn-Fathlan associated with the beginning of the X-th century: 'Cranes are our Rabby (Deity). They made our enemy flee', say the Bashkorts. That's why they worship cranes"[1].

The legend which entered the present collection (it was recorded at the beginning of the XX-th century), agrees on its basic motif with the data obtained from Ibn-Fathlan's writings: the cranes here also 'warned' the Bashkorts of the forthcoming battle and, thus, were looked upon as birds-protectors.

There is also some ethnographic material suggesting the idea that the crane was worshipped. The four subdivisions of the Uthargan tribe, for instance, regard the crane as the bird of their tribe. Killing it is banned altogether[2]. The Bashkorts of the Tilau tribe during their wedding feasts and other celebrations conducted the rite of 'cranes' dancing. They also considered the bird as the tribe's ancestor, the symbol of happiness. The dance performer disguised himself as a 'crane', wearing a wooden crane head topped on a stick and a white furcoat, turned inside out, on his back.

The ancient notions of worshipping animals and birds is also observed in The Babyrook' song-legend. The archaic part of the plot is not only restricted to the 'bird-mother' motif. As is seen from the poetic lines of the legend (the least subject to changes in the course of time), ancient people saw little difference between themselves and nature, or between themselves and animals. The verses reflect another motif characteristic of totemic notions - the ability of a human being to transform him/herself into an animal and vice versa:

Oh, my baby, oh, my dear,
You've become 'Babyrook', 'Babyrook'.

The trees that housed sacred birds on their tops were perceived by ancient people not just as ordinary trees, but as the birth-place of living beings, their sacred abode. This phenomenon is reflected in myths of many peoples, including Bashkort mythological legends and pedigrees. Mythological legends about the origin of the name of the Kypsak tribe are echoes of ancient notions. The prospective forefather of the tribe was born in a hollow of a tree. In the Turkic language a tree with a hollow in it is called 'kypchak'[3].

The search for evidence that the song-legend The Babyrook' originated from ancient beliefs inevitably calls to mind such folklore rites as the holidays of 'Karghatuy' or 'Karghabutka' (the rook's holiday, the rook's porridge). On closer examination the ritual dancing and playing, or prayers held during that holiday for our ancestors' peace, disclose in full the sacral meaning of the 'Karghatuy'. It is not merely a hearty welcome to a new year beginning and nature wakening, wishing for the rain, but, most likely, a desire to immortalize our forefathers' spirit. The ancient peo-

[1] *Ковалевский А. П.* Книга Ахмеда Ибн-Фадлана о его путешествии на Волгу в 921-922 гг. Статья, переводы и комментарии. - Харьков, 1956. С. 131.

[2] *Кузеев Р.* Г. Очерки исторической этнографии башкир. - Уфа, 1957. Ч. 1. С. 79-80.

[3] Башкирские шежере /Сост., перевод, введ. и коммент. Р. Г. Кузеева. - Уфа, 1960. С. 93.

pie believed that their forefathers' spirit woke up along with the nature in spring, and the birds incarnated that spirit. Strange as it may seem, the people's worship of rooks may be understood through their life experience. Thus, the rooks' flying back home each year was a token of the forthcoming spring, warmth and fertility.

A study of how different attitudes commonly occur and develop in people's minds essentially involves such songs-legends as "The Singing Crane", "The Babyrook" and other invaluable sources. Significantly, all these literary sources are of purely humanistic character. What else would render so accurately that great philosophical meaningfulness of the relationship between man and nature? The famous song 'Ural' which has stood the test of time and adjusted the present-day motifs still preserves that philosophical attitude as its core. Through the image of Uraltau (the Ural mountains) the mother-land is presented as a living being. However, that image should not be interpreted merely through the verse lines of the song. In people's minds it stands for a symbol of the Native Land. That accounts for the traces of historical events supporting the plot of the song.

Hai kem, when they laid down the arms[2].

The roof of the caravanserai is tin-plated,
Hai kem, tin-plated.
It was built by our fathers when the war came to an end,
Hai kem, when the war came to an end.
The major gave an order to all our people,
Hai kem, gave an order
For the warriors on horseback to return to civilian life.

(II, 131.)

Splashing water she 's doing the wash.[3]
Hai kem, as she washes,
Aren't her dear arms tired,

[1] The Caravanserai was built in Orenburg in the first half of the XIX-th century.
[2] After the abolition of the cantonal system on the territory of Bashkortostan, the cantonal chiefs had to hand over the arms and become civilian.
[3] This song is a lyrical version of the historical songs connected with that event.

Хей-кем, когда полощет?
Соседа, как всегда, мельком встречая,
Хей-кем, всегда встречая,
Не бьется ль ее сердце иногда,
Хей-кем, без сна вздыхая.

Коль с битвы возвращусь живым, сказал я,
Хей-кем, вернусь, сказал я,
Я обещал, что я на ней женюсь,
Хей-кем, женюсь, сказал я.
Коль с битвы я живым вернусь обратно,
Хей-кем, живым обратно...
Но замуж вышла, не сдержала клятву,
Хей-кем, предала клятву,
Когда пора замужества настала.

(V, 83.)

Hai kern, as she rinses?
We are neighbours and see each other often.
Hai kem, as we meet often,
I wonder if her heart melts with love,
Hai kem, in the evenings.

'If I come back safe from the war,
Hai kem, come back safe.'
I promised to marry her, gave her my word,
Hai kem, when I was leaving.
'If I come back safe from the war,
Hai kem, come back safe,'
She wouldn't wait for me - she broke her promise,
Hai kem, on reaching the age of a bride.

(V, 83.)

## 35. ПЕРОВСКИЙ

Беҙҙең яҡҡа Ырымбур губернаторы Перовский килергә булғас, Ҡыуатов кенәз[1] быны бик яҡш итеп ҡаршы алмаҡ була. Һый әҙерләтә. Юлдаш[2] ауылынан Шафиҡ тигән ҡурайсы саҡырта. Шафи бик оҙаҡ һалдат хеҙмәтен үтәгән кеше була.

Көнө еткәс, Ҡыуатов бер уяҙ урында (шул урынды әле лә "Перовский уяҙы", тип йөрөтәләр һалдаттарҙы теҙҙерә. Ат өҫтөндә килгән Перовскийҙы күреү менән, Шафиҡ ҡурайсы марш уйна ебәрә. Һалдатта уйнаған маршы булдымы икән, әллә Перовскийҙың үҙенә төбәп сығарған кө булдымы — быныһын өҙөп кенә әйтә алмайым. Губернатор ат өҫтөндә килеш һалдаттар алдына әйләнеп сыға. Шафиҡ ҡурай уйнай. Уның ҡурайына башҡа егеттәр ҙә ҡушылып китә. Марш көйөн Перовскийҙың аты бейегән һымаҡ итеп юрғалай икән.

"Перовский" — өс өлөштән торған көй ул. Бейеүгә һалабыҙ, тип, көйҙөң һөлдәһен генә ҡал дырҙылар хәҙер. Мин уны ҡурайҙа элек ишеткәнсә уйнайым:

Ҡурай

Неторопливо ♩= 58-62



[1] *Ҡыуатов кенәз* — Әлмөхәмәт Ҡыуатов күҙ уңында тотола.
[2] *Юлдаш* — Ейәнсура районына ҡараған ауыл.


mf
Скоро ♩ = 92
mf



(VI, 18—19.)

## 35. ПЕРОВСКИЙ

Узнав, что оренбургский губернатор Перовский собирается приехать в наши края, князь Куватов[1] решил как следует его встретить. Велел приготовить угощения. Пригласил из аула Юлдаш[2] кураиста по имени Шафик, который прошел долгую солдатскую службу. Когда настал срок приезда губернатора, велел выстроить солдат в низовье между холмами - уязе (теперь то место называют "Уяз Перовского"). Едва завидев приближавшегося на коне Перовского, кураист Шафик начал наигрывать марш. Был ли это марш, который он исполнял на военной службе, или специально сочиненный в честь Перовского, сказать не могу. Сидя на коне, губернатор проехал перед строем солдат. Шафик все это время играл на курае. Другие егеты также присоединились к его игре. Конь Перовского будто бы вытанцовывал под маршевую мелодию.

"Перовский" - мелодия, состоящая из трех частей. Теперь оставили лишь ее стержневой мотив: мол, создадим танцевальную музыку. Я играю ее так, как когда-то услышал в исполнении на курае.

(VI, 18-19.)

*Князь Куватов* - имеется в виду Альмухамет Куватов.
*Юлдаш* - аул на территории Зианчуринского района.

## 35. PEROVSKY

When Perovsky, the governor of Orenburg, was reported to be coming to our region, Knaz Kuwatov[1] decided to give him a hearty welcome. He arranged for a festive dinner and invited a kurai-player from the neigbouring village of Yuldash[2]. The kurai-player, Shafik by name, had himself been in military service for quite a time.

On the appointed day Kuwatov led his soldiers to a valley outside the village (the place is still referred to as the Perovsky uyath[3]). The soldiers lined up there, waiting for the governor to arrive. The moment Shafik the kurai-player saw Perovsky on horseback, he started playing a military march. Whether it was an old tune he had learned in the army, or whether Shafik had composed it for the occasion, remains unknown.

Perovsky rode along the row of soldiers while Shafik was playing his instrument, and very soon the soldiers found themselves singing, and even Perovsky's horse seemed to have started dancing to the tune.

The song 'Perovsky' comprises three parts. It was later shortened so as to be adapted to a dance. The original 3-part song is represented here.

(VI, 18-19.)

[1] *Knaz Kuwatov*- Almohammat Kuwatov is meant.
[2] *Yuldash* - village in the Yeyansura region of Bashkortostan.
[3] *Uyath* - from 'uyezd' (Russ.), an administrative unit, a region or locality.

## 36. ӘЛМӨХӘМӘТ КАНТОН

Был йыр Әлмөхәмәт Ҡыуатов тураһында. Ул заманының киң мәғлүмәтле, уҡымышлы кешеһе булған; Ҡазан университетын тамамлап фән кандидатлығы дәрәжәһен алған, күп телдәр белгән. Уҡып ҡайтҡас, Ырымбурҙың хәрби губернаторы Перовский янында эшләгән. Шундай абруйлы, белемле кешене ҙурлап, кантон итеп ҡуйғандар[1]. Йәш кенә булыуына ҡарамаҫтан, ул халыҡта ҙур хөрмәт ҡаҙанған. Уны данлап йыр ҙа сығарғандар:




[1] Филми әҙәбиәттән билдәле булыуынса, Әлмөхәмәт Ҡыуатов төрлө кантондарҙа, шул иҫәптән Ырымбур өйәҙенең Юлдыбай ауылында, 1855—1863 йылдарҙа башлыҡ булып торған // Башҡорт халыҡ ижады: Йырҙар. 1-се китап. — Өфө, 1974. 334-се бит.




Э-й... Һаҡмар ғына һыуҙың буйҙарында
Тутый ялан кеүек тә ер ҡайҙа?
Э-й... Егерме лә йәштә кантон булған
Әлмөхәмәт кеүек ир ҡайҙа?

Э-й... Әлмөхәмәт менгән тураткай,
Ер ҡыялатып осҡан да ҡош кеүек.
Э-й... Әлмөхәмәт менән бер һөйләшеү,
Таң алдынан күргән дә төш кеүек.

(VI, 19—20.)

## 36. АЛЬМУХАМЕТ-КАНТОН[1]

Эта песня об Альмухамете Куватове. Для своего времени он был широко образованным человеком. Окончив университет в Казани, стал кандидатом словесности, знал несколько языков. После возвращения с учебы работал при военном губернаторе Оренбурга Перовском. Его как авторитетного, образованного человека назначили кантонным начальником. Несмотря на молодость, он пользовался большим уважением в народе. В его честь сложили песню:

Эй, вдоль реки, вдоль всей реки Хакмара
Как луг Тутый таких не сыщешь мест,
Эй, в двадцать лет кантонным стал недаром,
Где взять такого, как Альмухамет.

Эй, конь гнедой несет Альмухамета,
Летит как птица над землею он.
С Альмухаметом даже и беседа
Так сладостна, как предрассветный сон.

(VI, 19-20.)

[1] *Альмухамет Куватов* был начальником разных кантонов Оренбургского уезда в 1855-1863 гг. // Баш. нар. творч.: Песни.-кн.1.-Уфа,1974, С. 334 (на башк. яз.).

## 36. ALMOHAMMAT CANTON[2]

This is a song about a man of distinction whose name is Almohammat Kuwatov. He was a learned man who knew many languages. Upon graduating from Kazan University he was awarded the degree of Kandidat of Philology, then he began to work under Perovsky, the then military governor of Orenburg. His profound knowledge was soon deservedly appreciated, and he was made Cantonal Chief. Young as he was, he enjoyed great popularity and won universal acclaim. The following song was dedicated to him.

Hey, is there any other place by the Hakmar riverside
As beautiful as Tutyi field?
Hey, is there any other man, at twenty
The Cantonal Chief?

Hey, Almohammat, swift as a bird he went,
When riding his steed of bay.
Hey, Almohammat, to speak to him but once
Was like having a sweet dream on the morrow.

(VI, 19-20.)

[1] *Almohammat Kuwatov* was the cantonal chief of different cantons in the Orenburg uyezd, of the village of Yuldybai in 1855-1863.

[2] *Canton* - cantonal chief.

## 37. ТӨХФӘТ КАНТОН[1]

Сдержанно ♩ = 40-42




Урай ғына урай ат сабырға(й)
Сөңгөл ере кеүек ер ҡайҙа?
Сыбыҡ менән ҡағыҙ ҡулдарында,
Төхфәт кеүек яуыз ир ҡайҙа?

Тәҙрә генә үтә емдәр һиптем
Үҙем генә һөйгән бөркөткә.
Төхфәт кантон эше палатала,
Китер микән үҙе Иркүткә?

Каруансылар килә, ай, теҙелеп
Бохараның алыҫ юлынан.
Етмеш бер тин хәйер бирер инем,
Ҡотолмаһа хөкөм ҡулынан.

(III, 95.)

[1] *Төхфәт* — фамилияһы — Үтәүи, 1819—1832 йылдарҙа Троицк өйәҙендәге 4-се кантонда (хәҙерге Учалы районы) башлыҡ булып торған.

## 37. ТУХФАТ-КАНТ0Н1

Ах, сунгуль[2] - найти ль его светлее?
Часто скачки вкруг него шумят.
Кнут в руках, бумага - есть ли злее
В целом свете, чем кантон Тухват?

Распахну широкое окно я,
Покормлю орла я своего.
Занят суд делишками кантона,
Скоро ли в Иркутск сошлют его?

Караван из Бухары устало
Ровным рядом движется сюда.
Семьдесят одну копейку дал бы[3],
Лишь бы не избег кантон суда.

(III, 95.)

[1] *Тухват* - Тухват Утявов в 1819-1832 гг. служил начальником 4-го кантона Троицкого уезда (ныне Учалинского района).
[2] *Сунгуль* - глубокое озеро круглой формы.
[3] Имеется в виду милостыня, пожертвование.

## 37. TOHFAT CANTON

To gallop your horse all around,
The place like Songol[2] where else can be found?
A switch and a paper[3] in hand,
So savage a man where else can be found?

I gave the feed right through the window
To my eagle, to my own dear pet.
The case of Tohfat Canton is in the court,
I wonder if he will be exiled to Irkut[4].

A caravan is coming in a single file
From far-off Bukhara they started on the way.
I would give seventy-one tin haier[5],
If from the justice he could not escape. -

(III, 95.)

[1] *Tohfat* - Tohfat Utavov was the cantonal chief of the 4-th canton of the Troitsk uyezd of the present-day Uchaly region in 1819-1832.
[2] *Songol* - deep pit filled with water, lake. .
[3] *Paper* - here: register of people's property, income, punishment, etc.
[4] *Irkut* (Irkutsk) - town in Siberia, used to be the place of exile.
[5] *Haier* - alms.

# 38. БУРАНБАЙ

Широко ♩= 48






Оҙон да ғына оҙон, ай, бик моңло
Буранбайҙың һуҙған йырҙары.
Буранбайҙың йырын тыңлағанда
Йөрәкһенә ауыл ирҙәре.

Буранбай Ҡотдосов[1] 1800 йылдарҙа йәшәгән. Сығышы менән Баймаҡ районы, Буранбай ауылы (элекке Ырымбур губернаһы, I Бөрйән олоҫо, Кинйәбулат ауылы.) Бик батыр, мәргән, тапҡыр һүҙле, оҫта йырсы, ҡурайсы булған, һунарға йөрөгән, ук-һаҙаҡ менән оҫта эш иткән. Бер күҙе һуҡыр булған. Халыҡ был хаҡта йыр ҙа сығарған:

Буранбайҙы һуҡыр тиҙәр,
Бер күҙкәйе менән ҡарайҙыр...

Атаһы — Зөлкәрнәй, ҡатыны — Тутыйғош. Нәүширбән исемле улдары булған (хәҙерге Нәүширбәновтар шунан килеп сыҡҡан.)

Һаҡмарҙың уң яғындағы Мәкәр урманы ул ваҡытта ҡарағас ағас менән ҡапланған булған. Буранбай шул ҡарағастан өй һалып торған. Нигеҙе 12 бүрәнәнән һалынған.

Буранбай заманына күрә уҡымышлы, ғәрәпсә уҡый-яҙа белгән кеше булған. Шулай уҡ күҙ бәйләү (гипноз) һәләтенә эйә булған. Байҙар алдында һис ваҡыт баш эймәгән, һәр ваҡыт ярлыларҙы яҡлаған. Шулай булғаны өсөн тирә-йүндә ихтирам яулаған. Ярлылар уға кәңәш һорап барғандар. Юғары властар Буранбайҙан бик ныҡ ҡурҡҡандар, унан ҡотолоу сараһын эҙләгәндәр. Ырымбурға ялыу яҙғандар. Әллә нисә мәртәбә саҡыртыуҙарына ҡарамаҫтан, ул Ырымбурға бармай, урманда ҡасып йөрөгән. Шул ҡасып йөрөгәндә, ул Сибай кантон менән дә бәйләнешкә ингән. Сәркәтибе Ибраһим менән йөрөгән. Ирәндектә, унан һуң Үҙәндә йөрөп, бер йыл үткәргән. Ауылға ҡайтырға мөмкинселек тапмаған.

---

[1] Ә. З. Әсфәндиәров тапкан архив яҙмаларынан билдәле булыуынса, Буранбайҙың фамилияһы — Һөйәндеков, атаһының исеме Ҡотос, фамилияға күскәс — Ҡотосов ("Совет Башҡортостаны", 1983, 3 ноябрь).

Шулай ҙа бер төндө ул ауылға ҡайтырға булған. Апрель айының Һаҡмар ташып ятҡан ваҡыты. Ҡайтып, һыйыр һауып ултырған ҡатыны менән күрешкән дә, атын һарайға индереп, өйгә кергән. Һәр ваҡыт күҙ яҙҙырмай аңдып йөрөгән һаҡсылар, быны күреп ҡалып, өйҙө ҡамағандар. Тик улар Буранбайҙы таба алмаған. Һарайҙағы ат та табылмаған. Үҙенең күҙ бәйләү һәләтлеге менән ҡотолоп ҡалған. Иртәнсәк китергә йыйынған. Һағалап торған һаҡсылар тағы ла Буранбайҙы тоторға булып, артынан төшкәндәр һәм Һаҡмарҙа ҡамағандар. Ауылдың уртаһында тирәк бар. Шул тирәк тәңгәленән шаулап киткән боҙға ҡарамаҫтан ул аръяҡҡа сыҡҡан да: "Бына Буранбай мин булырмын", — тип, Шәңгәр юлы (Әлекке Тоҙ юлы) буйлап "Ҡасҡын ҡарағайы"на ҡаса. ("Ҡасҡын ҡарағайы" — хәҙерге Шүлкә ауылы янындағы урман.) Һәр ваҡыт билбауында йөрөткән һәрпәк балтаһы менән ҡарағайға йыр яҙған. Үҙе был ерҙәрҙән бөтөнләй китергә уйлаған. Мораҡҡа (хәҙерге Күгәрсен районы), Ишбирҙе ауылына, дуҫы Суфиян ҡартҡа барған. "Мин илдән киттем, йырымды "Ҡасҡын ҡарағайы"на яҙып ҡалдырҙым. Дәртең булһа, ҡояш төшөп, сайыр (һағыҙ) иремәҫ борон барып яҙып ал", — тип хушлашҡан да, Дим буйына Иҙелбай[1] ауылына барып төпләнгән. Шул ауылдан ҡатын алған (1824 йылдар тирәһе).

Ә Суфиян ҡарт теге ҡарағайға барған, тик сайыр ағып өлгөргән булған. Шулай ҙа бер нисә юлын күсереп алған. Шуларҙың береһе:

Буранбайҙың ғына, ай, баҡсаһы
Ун ике лә төрлө япраҡ...

Буранбайҙың артабанғы яҙмышы билгеле түгел. Тик шуныһы, ул башҡа яҡтарҙа йөрөгәндә, үҙен Буранбай тип түгел, Ялан Йәркәй тип таныҡтан. Бынан Буранбай менән Йәркәйҙең бер үк кеше булғанлығын әйтергә була.

1956 йылда Иҙелбай ауылынан Буранбайҙың ейәне Заһиҙулла килгән, тиҙәр беҙҙең ауылға. Уның һөйләүенсә (йылы билгеһеҙ), олатаһы Дим буйында үлеп ҡала.

Бик күп йылдар буйы Буранбайҙың ук-һаҙағын һаҡлап килгәндәр.

50-се йылдарға тиклем беҙҙең ауыл Кинйәбулат исемен йөрөткән. Шунан һуң, ҡарттарҙың һорауы буйынса, Буранбай иҫтәлегенә ауылды "Буранбай"ға үҙгәртәләр.

Ололарҙың әйтеүенә ҡарағанда, Буранбайҙың йорт нигеҙенең дә урыны билдәле. Хәҙер ауылдағы Буранбаев, Нәүширбәнов, Шәйхисламов, Үтәбаев, Халиковтар Буранбайҙың тамырҙары һанала.

(X, 74—76; XI.)

---

[1] Дим буйында Иҙелбай ауылы булыуы билдәле түгел. Беренсе һәм Икенсе Иҙелбай ауылдары Башҡортостандың хәҙерге Салауат районында бар.

## 38. БУРАН БАИ

Пленительны напевы Буранбая,
Им, кажется, нет края и конца.
Сердца мужские кровью истекают,
Внимая песням скорбного певца.

Буранбай Котдосов[1] жил в 1800-х годах. Родился он в ауле Буранбай Баймакского района (деревня Киньябулатово Первой Бурзянской волости бывшей Оренбургской губернии). Он был известен как острослов, искусный певец-сэсэн, великолепный кураист. Ко всему он был еще истинным батыром, сильным и смелым человеком. На охоте метко стрелял из арбалета, хотя и был слеп на один глаз. Люди пели об этом:

Буранбай был, говорят, слепым,
Глазом видел, говорят, одним...

Отец его - Зулькарнай, жена его - Тутыйгош. У него был сын по имени Науширбан (от него идут нынешние Науширвановы аула). В те времена Мэкэрский лес на правобережье Хакмара был покрыт сосновыми деревьями, карагасом[2]. Буранбай выстроил свой дом из того карагаса. Фундамент дома был выложен из 12 бревен. Для своего времени Буранбай был образованным человеком, читал и писал по-арабски. Обладал искусством гипноза. Не клонил голову перед богатеями, всегда горой стоял за бедняков. Те шли к нему за советами. Власти искали способа.чтобы отделаться от Буранбая. Они написали на него жалобу в г. Оренбург. Оттуда пришло несколько вызовов, но Буранбай не откликнулся ни на один из них, скрывался в лесу. В это

[1] Согласно архивным материалам, обнаруженным А. 3. Асфандияровым, Буранбай - сын Кутуса (Котос улы), фамилия его - Суюндуков: Он стал носить фамилию Кутусов по имени своего отца ("Совет Башхортостаны", 1983, 3 ноябрь).
[2] *Карагас* - лиственница.

## 38. BURANBAI

When you are singing, Buranbai,
So very tuneful is your song.
Men can't help being agitated
To hear it sound so sad and long.

Buranbai, the son of Kotdos, lived in the 1800-ies. He came from the village Buranbai of the Baimak region (the former village Kinyabuiat of the First Beryan volost[2] of the Orenburg gubernia).

He was known to be a man of great courage, strength and wit, a real batyr. He was also famed for his poetry, singing and playing the kurai.

He used to go hunting and was a very skilful archer. He was blind in one eye. People sang this song about him.

People say, Buranbai is blind,
He can see but with one eye.

His father's name was Zolkamai, his wife's name was Tuteygosh. They had a son named Nowshirban. The presentday Nowshirbanovs are his descendants. At that time the Makar forest on the right bank of the Hakmar was all larch and pine trees. Buranbai used larch trees to build a house. He laid a foundation of twelve logs for it.

Buranbai was well-educated for his time. He could read and write in Arabic. He had a capacity to hypnotize people. He would never belittle himself with the rich and always protected the poor.

Neighbourhood people respected him and sought his advice. The authorities feared Buranbai and tried to get rid of him. They sent a letter of complaint about him

[1] According to the archive materiai found by A. Z. Asfandiyarov Buranbai was the son of Kutus (Kotos). His surname was Soyondokov. Then he took his father's name for his surname ("Совет Башхортостаны", 1983, 3 ноябрь).

время он общался с Сибай-кантоном, имел отношения с помощником Ибрагимом. Целый год провел на Ирендыке, потом в Узени, не имея возможности вернуться в родной аул.

И все же в одну из ночей он решил воротиться в аул.

Стоял апрель, пора половодья на Хакмаре. Поздоровавшись с женой, доившей в это время корову, он завел коня в сарай и вошел в дом. Соглядатаи, не сводившие глаз с его дома, заметили его приход и окружили жилище Буранбая со всех сторон. Но им не удалось обнаружить ни Буранбая, ни его коня в сарае- это Буранбай использовал свое умение гипнотизировать и стал невидимым для соглядатаев. Наутро он простился с женой, осторожно вывел коня из сарая. Но соглядатаи, продолжавшие за ним следить, пустились в погоню и настигли его у самого Хакмара. Несмотря на ледоход, Буранбаю удалось перебраться на другой берег. Со словами "Вот таков я, Буранбай" он убежал по Шунгурской дороге (бывший соляной путь) в "Кастын карагай" - "Сосняк беглецов" (лес возле деревни Шульке). На сосне он вырубил слова песни топориком, который всегда носил за поясом, и решил отныне навсегда покинуть эту землю. Он поехал в Морак (нынешний Кугарчинский район), в аул Ишбердино к другу своему старику Суфияну. "Я покинул аул и дом, песню свою написал на стволе сосны. Если желаешь, поезжай и перепиши слова, пока не стаяла под солнцем смола", - сказал он старику и отправился в деревню Идельбай[1] на берегу Демы, где и обосновался. Там он женился на девушке этой деревни. Было это около 1824 года. Сыновьям своим дал те же имена (что и в Баймакском аймаке).

Когда старик Суфиян приехал к той сосне, смола успела уже стаять и натечь на вырубленные

[1] *Идельбай* - деревня под этим названием в Демском бассейне (регионе) не числится. Селения Первое и Второе Идельбаево расположены в Салаватском районе Башкортостана.

to Orenburg. He was summoned to Orenburg several times but he wouldn't obey and preferred to hide in the forest. At that time he met with the cantonal chief of Sibai and his assistant Ibrahim. For a whole year he roamed among the Irandek mountains, then on the river Uthan. He dared not return.

One night, however, Buranbai made up his mind to visit his village. It was April, the Hakmar river was flooded. When he came, he first greeted his wife who was milking cows, then he put his horse in the shed and entered the house. The spies, watching his place, noticed him come back and surrounded the house. But they failed to detect Buranbai and his horse in the shed because he used hypnosis and got lost from their sight. In the morning he saddled his horse, bid farewell to his wife and was about to leave, when his watchers, who were still there rushed after him, trying to capture him. They made him ride close to the Hakmar bank. In the middle of the village there is a poplar tree. Just opposite the tree Buranbai managed to cross the river in spite of the drifting ice. Saying 'What a chap am I, Buranbai!', he escaped by the Shongor road (the former Salt Way). Then he went to the Kaskyn[1] Pine Wood (the forest near the village Shulka). He took his light axe tied to his belt and carved a song on a pine tree. Buranbai decided to leave the place forever. He went to Morak (the present-day Kugarsen region) to the village Ishbirtheh to his friend old Sufian. 'I've left my birth place,' he said, 'I've written the words of my song on the Kaskyn Pine Tree. If you wish, you can go there and copy the song before the resin melts in the sun,' he said to the old man and left.

Buranbai reached the village Ithelbai[2] and settled there. He married a woman from that village (it was about 1824). He gave his sons the names of his elder children from the Baimak region.

[1] *Kaskyn* - fugitive.

[2] No village under the name has been registered in the Dim basin. There are two villages: The First Ithelbai and The Second Ithelbai in the Salawat region of Bashkortostan.

Буранбаем слова песни. Тем не менее он сумел различить некоторые из них:

В саду Буранбая зеленеют
Деревья двенадцати разных пород...

Дальнейшая судьба Буранбая неизвестна. Знают только, что он называл себя в других местах не Буранбаем, а Ялан-Еркеем.

Говорят, в 1956 году в наш аул приезжал внук Буранбая. По его словам, Буранбай умер на берегах Демы (год смерти неизвестен). Говорят, потомки долгое время хранили его лук и стрелы.

До 50-х годов наш аул носил название Кинь-ябулатово. Затем, по просьбе наших стариков, в честь Буранбая он был переименован в Буранбаево.

Если верить словам старых людей, известен и фундамент буранбаевского дома. Ныне Буранбаевы, Науширвановы, Шайхисламовы, Утябаевы, Халиковы считаются потомками Буранбая.

(X, 74-76; XI.)

When old Sufian went to the pine tree the resin had already melted and covered the letters. He could make out some of them.

It's only in the garden of Buranbai
That trees grow of a dozen kind.

The further destiny of Buranbai is virtually unknown apart from just one detail. When roaming in other lands he didn't call himself Buranbai but Yalan-Yarkai (Man from Plains). We can say for sure that Buranbai and Yalan-Yarkai is one and the same person.

It is said that in 1956 Zahithulla, the grandson of Buranbai, came from Ithelbai. He said that Buranbai had died on the river Dim, but the date of his death was unknown. His descendants had kept his bow and arrows for a long time. Till the 50-ies our village was called Kinyabulat. Then on the request of the old people it was renamed in the memory of Buranbai. Old people say they know the place where the remains of the foundation of Buranbai's house lie.

The Buranbaievs, Nowshirbanovs, Shaih-al-Islamovs, Utabaievs and the Halikovs are considered descendants of Buranbai.

(X, 74-76; XI.)

## 39. БАЯС

Һаҡмар буйында мыҡты кәүҙәле, оҫта йырсы һәм ҡурайсы, сәсән телле Баязитдин исемле батыр йәшәгән, ти. Ул үҙенең бер туған апаһы менән бергәләп, билгә һөңгө таҡып, уҡ-һаҙаҡ менән ҡоралланып, иң яҡшы уҡсыларҙы йыйып ала ла, ерҙәрен талаусыларға ҡаршы һуғыш башлай. Баястың (Баязитдинде шулай тип йөрөтәләр) ата-әсәһе лә, яҡын туғандары ла язалап үлтерелгән була.

Баяс та, апаһы ла атта оҫта, йылғыр йөрөй белгән. Ярышта көмөш балдаҡ аша уҡ атып, алмаш-тилмәш беренселекте бирмәгәндәр. Дошманға ҡаршы атҡан уҡтары ла бушҡа китмәгән. Шулай ҙа, мылтыҡ менән ҡоралланған карателдәрҙең ҡыҫымына түҙеп тора алмай, сигенергә мәжбүр булғандар.

Улар Урал арты башҡорттары араһына килеп сығалар. Кешеләр төрлө ауылдарға таралып ултыра. Апаһы менән Баяс Ирәндек буйлап күсеп йөрөй. Ирәндекҭең көнсығыш битендә "Баяс сауҡаһы" тигән урын бар. Һаҡмар буйындағы Түбәнге Яйыҡбай ауылы ерендә бер тау "Апай тауы" тип атала. Һөйләүҙәренә ҡарағанда, батырҙар бына ошо ауылдарҙа тороп киткәндәр.

Ил тыныслана башлағас, Баяс үҙе Күсей[1] ауылына урынлашып йәшәй башлай. Һылыу ғына ярлы ҡыҙына өйләнә. Ә апаһы Басай[2] ауылына кейәүгә сыға.

Йылдар үтеү менән байҙар, Баясты күрә алмай, килмешәк тип мыҫҡыл итәләр. Ялған ғәйеп таҡып, Себер ебәрергә һүҙ беркетәләр.

Баяс, быны һиҙеп, тағы ҡаҫҡынға әйләнә. Өйө тирәһенә көн-төн йәшерен ҡарауыл ҡуйыла. Ҡаҫҡынды тота алмағас, "эҙләүҙе туктатырға" тигән булып, ялған хәбәр тараталар. Шымсылар Баястың ҡатынынан күҙ яҙҙырмайҙар.

Баяс менән ҡатыны шулай ҙа осрашып торғандар. Уларҙы, уңайын тура килтереп, тота ғына алмағандар. Баястарҙың икәү-ара вәғәҙәләре була: аулағыраҡ яҡҡа китергә. Ошо уй менән йәйҙең матур бер көнөндә еңелсә генә кейем-һалым, аҙыҡ ала ла ҡатыны, еләккә киткән кеше булып, йәшеренә-йәшеренә юлһыҙ ерҙән ире янына йүнәлә. Шымсылар һиҙҙермәй генә быларҙың артынан күҙәтеп баралар. Түҙемһеҙлек менән көтөп торған Баяс күреү менән ҡатынын ҡосаҡлап ала. Ҡоралды шымсылар килеп, уларҙы шунда уҡ тоталар. Баястың аяҡ-ҡулын бәйләп, хәлдән тайҙырғансы туҡмап, ауылға килтерәләр.

Ни тиклем ҡаты туҡмаһалар ҙа, Баяс дошмандарына бер һүҙ өндәшмәй. Сырайын да һытмай.

Себергә оҙатҡанда, ике һыбайлы, тимер сынйыр менән етәкләп, урам буйлап үтәләр. Шул саҡта Баяс моңло тауыш менән йырлап ебәрә:

Арҡаларҙа ятып ҡар иремәй,
Ерҙә ятып алтын серемәй.
Әскенәйем бошоп йөрөгәндә,
Бер йырламай күңелем иремәй.

---

[1] *Күсей* – Башҡортостандың Баймаҡ районына ҡараған ауыл.
[2] *Басай* – шул уҡ райондағы ауыл.

Һауаларҙа уйнай, ай, ыласын ҡош,
Тояҡҡайҙары ҡыҙыл буяулы.
Үҙ илкәйҙәренән, ай, һөрөлгәс,
Кем балаһы кемгә аяулы?

Ат ҡушаҡлап йөрөп бында килдем,
Ҡалдырҙым мин тыуған ерҙәрҙе.
Уғыры ла тип, хурламағыҙ
Ирәндеккә ҡаҫҡан ирҙәрҙе.

Ҡурай

Неторопливо ♩ = 52




Баястың зарлы йырҙарын ишетеп, ауыл ярлылары, ҡатын-ҡыҙ, бала-саға сыр-сыу килеп илашып ҡала. Шул китеүенән Баяс әйләнеп ҡайтмаған.

(IV, 242—243.)

## 39. БАЯС

На берегу Хакмара, говорят, жил егет могучего сложения, искусный певец, кураист и острослов. Звали егета Баязитдин. Вместе с родной сестрой вооружился он копьем, луком и стрелами, собрал отряд лучших стрелков и начал борьбу против тех, кто грабил их земли. Родители Баяса (так называли Баязитдина), родные и близкие были замучены, убиты.

И Баяс, и его сестра были искусными наездниками, на состязаниях пробивали стрелою колечко, попеременно побеждая, никому не уступая первенства. Да и выпущенные в сторону врагов стрелы точно находили свою цель. Но устоять против ружей и натиска карателей им было трудно, и они вынуждены были отступить.

Так оказались они среди зауральских башкир. Отряд расселился по разным аулам, а Баяс со своей сестрой стал кочевать по Ирендыку. На восточном приотрожье Ирендыка есть молодой березняк по названию Баяссаука (Березняк Баяса). На земле аула Нижний Яикбай в низовьях Хакмара есть гора, которая называется Апай-тау (Сестрина гора). Это память о пребывании Баяса и его сестры в тех местах.

Когда смутные времена миновали, Баяс стал жить в ауле Кусеево[1]. Там он женился на красивой дочери одного бедняка. Сестра его вышла замуж за егета из аула Басаево[2].

Шли годы, и постепенно баи стали проникаться к Баясу ненавистью, называли его не иначе, как "пришелец". Они сговорились оклеветать его и под ложным наветом отправить в Сибирь.

Учуял это Баяс и решил бежать. К дому его приставили секретный караул, который дни и ночи не смыкал глаз. Но Баяс не появлялся. Так и не

[1] *Кусеево* - дер. в Баймакском районе Башкортостана.
[2] *Басаево* - дер. в том же районе.

## 39. BAIAS

By the Hakmar riverside there lived a batyr named Baiazitdin. He was stalwart, sharp-tongued and could sing very well. With his elder sister he took his bow and arrows, hung a lance on his belt, gathered a team of the best archers and went to fight against the oppressors of his land. By that time all his close relations and his parents had been tortured and put to death.

Both Baias and his elder sister were very nice horse riders. In turns they won the archers' contests, shooting an arrow through a silver ring. The arrows they aimed at their enemies didn't miss the target either. But they had to retreat when confronted by troops armed with guns.

They settled among the Transural Bashkorts. His former brothers-in-arms scattered themselves among various villages. Baias and his elder sister roamed about the Irandek ridge. On the eastern slopes of the Irandek there is a place called 'Baias' Birch Growth'. By the Hakmar river, near the village Lower Yaikbai there is a mountain called The Mountain of the Elder Sister'. People said that Baias and his sister had lived there for some time.

When life in the neighbourhood grew peaceful, Baias settled down in the village called 'Kusei'. He married a beautiful girl from a poor family. His elder sister began her married life in the village called 'Basai'[1].

As years passed by the rich people came to hate Baias. They mocked at him by calling him 'a foreigner'. They plotted to send him to Siberia on a false charge.

Baias discovered their plans and had to flee again. A secret watch was begun at his house by day and by night. After they failed to capture him, a rumour was spread that the search had been given up. Meanwhile the spies kept watching Baias' wife.

[1] *Kusei, Basai* - villages in the Baimak region of Bashkortostan.

сумев изловить беглеца, баи распространили ложный слух, будто поиски его прекращаются. Но сыщики не спускали глаз с его жены. И все же Баяс ухитрялся встречаться с нею. Происходило это в столь глухом месте, что сыщики никак не могли напасть на их следы.

В один из погожих летних дней жена Баяса, прихватив кое-какую еду, вышла из дому, сказав, что отправляется по ягоды, а сама вскоре свернула с дороги и по безлюдным местам подалась в ту сторону, где ее ждал муж. Сыщики незаметно следовали за ней. Нетерпеливо ожидавший ее, Баяс обнял жену. И тут появились вооруженные преследователи и схватили их. Баяса связали по рукам и ногам, избили до полусмерти и повели в аул. Никакие пытки не могли его сломить - Баяс не произнес ни слова, даже вида не подал, как он страдает.

Когда его отправляли в Сибирь, то сопровождали егета два всадника. Баяса, скрученного железной проволокой, вели по улице аула. И тогда Баяс запел задушевным голосом:

Лежащий на хребтах, не тает снег,
Лежащее в земле, не тлеет злато;
Душа не успокоится вовек,
Пока не запоешь, тоской объятый.

Ветрами поднебесными гонимый,
Летает в небе сокол без конца.
Когда тебя изгонят с мест родимых,
Никто не пожалеет беглеца.

Я родину оставил на закате,
Ах, на свободе вольно я скакал.
Ворами тех мужчин не называйте,
Кто в горы Ирендыкские бежал.

Слушая печальную песню Баяса, все бедняки аула, девушки и женщины, дети и старики плакали навзрыд. Больше Баяса никто не видел.

(IV, 242-243.)

Baias and his wife kept seeing each other. So far the spies had failed to catch them. The couple had decided to leave for some out-of-the-way place. On a fine summer day, having taken some light clothing and food with her, Baias' wife went to his hiding place, pretending to be going to gather berries. She tried to pass unnoticed and kept off the roads. But the spies secretly followed her. Baias, eager to see her, embraced her the moment she came. The armed watchers came out and captured them. They tied up Baias' arms and legs, beat him severely and brought him to the village.

No matter how cruelly they beat him, Baias didn't say a word. He didn't move a muscle.

When he was being sent to Siberia, and two men on horseback led him by an iron chain, Baias began to sing.

Snow never melts on mountain crests,
Gold never rots in the ground,
Overcome by sorrow, I can but sing
To warm my heart.

A falcon bird is playing in the air,
Its talons are painted red.
Banished from my land I'll have to roam,
Who'll spare me, the son of a remote land?

I wandered with my horse and here I came,
I had to leave me native place,
Don't call 'thieves' all those men
Who refuge seek in the Irandek.

When the poor people of the village, the women and the kids, heard Baias' sad song they replied with a hubbab of wailing. Baias never came back.

(IV, 242-243.)

## 40. БЕЙЕШ БАТЫР

"Бейеш" — башҡортта иң яратып йырланған көйҙәрҙең береһе. Элегерәк беҙҙең Баймаҡ, Әбйәлил яҡтарында атай-олатайҙар уны йырлайҙар ҙа аҙаҡ көйҙөң тарихына төшөп китә торғайнылар.

Уларҙың һөйләүенә ҡарағанда, Бейеш батыр ошо Әбйәлил, Баймаҡ яғы башҡорто булып сыға[1]. Батыр бер ауылда, бер урында ғына йәшәмәгән. Ул күп ғүмерен Ирәндек, Уралтау буйҙарында үткәрә. Ни өсөн тигәндә, Бейеш заманының түрә-ҡаралары, байҙары менән һыйышмаған, уларҙы күрә алмаған. Бына ошо яңғыҙ тормош уны йырларға ла, ҡурайҙа уйнарға ла өйрәткән.

Бейештең ата-әсәһе ярлы була. Шуға ҡарамаҫтан, ул үҙенең тиңдәштәре араһында ҙур кәүҙәле, көслө бала булып үҫә. Ныҡлы, көслө малайҙан өлкәнерәктәр ҙә шыртлаған. Көрәшкәндә, уйнағанда яңылыштан ҡайһы берҙә тиңдәштәренең аяҡ-ҡулдарын да һындырып ҡуя торған булған. Бай балалары илаһа, бәлә һалһа, яза Бейештең ата-әсәһенә төшкән.

Ун-ун ике йәштәрҙә инде ул бик ҙур кәүҙәле малай булып үҫеп етә. Ни тотһа, шуны һындыра, ҡулдары көрәктәй, йоҙроҡтары сүместәй икән. Ә ун алты-ун ете йәшендә киң яурынлы, яҫы маңлайлы, үткер күҙле, ҡара йылтыр йөҙлө һылыу егет була. Урта кәүҙәле берәй кеше Бейеш янында торһа, ултырһа, бала һымаҡ ҡына күренгән. Бәйгеләрҙә көрәштә уны бер батыр ҙа йыға алмаған, күптәр Бейеш менән көрәшеүҙән ҡурҡҡан. Хәҙер егеттең даны тирә-яҡҡа таралған, уны Бейеш батыр тип йөрөтә башлағандар.

Бейеш батырҙың ата-әсәһе ҡартая, инде егет үҙе байҙа тора. Ул эшкә шәп булған. Эшен дә эшләгән, ашын да ашаған, хатта бер ултырғанда бер ҡуйҙы йә биленә ураған ҡаҙыны ашап бөтә торған булған. Шуға күрә лә байҙар, эш хаҡың ашауыңдан артмай, тип, уға бик аҙ түләгәндәр. Ындай саҡта батыр асыуынан байҙы туҡмап китә торған булған. Шуға ла байҙар уны хеҙмәтсе итеп тотмайҙар, нисек тә булһа ҡотолоу юлын эҙләй башлайҙар.

Бейеш батыр ҙа уларҙы күрә алмай, ярлылар менән байҙарҙы айырып ҡарай башлай. Ата-әсәһе ярлы тормошта үлеп тә китәләр.

Бейеш батыр ҡасҡынға әйләнә. Байҙарҙы, батша түрәләрен талап, йорттарын яндырып, үс ала. Талап алған аҡсаларҙы, затлы әйберҙәрҙе ярлыларға таратып бирә. Хәҙер батша властары нисек булһа ла Бейеште юҡ итеү юлын эҙләй. Уға "Бейеш ҡараҡ" тигән исем тағалар.

Бер саҡ түрәләрҙең ярандары батырҙың эҙенә төшәләр, уны Ирәндек тауында осраталар. Батыр артыҡ аптырап тормаған, тирә-яғында үҫеп ултырған баҫырау йыуанлыҡ ағастарҙы йолҡоп алып, ҡыуыусыларҙы туҡмай башлаған. Эҙәрләүселәр, ҡоттары осоп, ҡаса башлайҙар.

Бейеш батыр Ирәндек, Урал тауҙарының ҡая таштары, ҡуйы урмандары араһында көндәрен үткәрә, ә төндәрен байҙарҙан үс ала. Бейеште былай ғына тотоп булмаясағын белеп, байҙар, тирә-яҡҡа һөрән һалып, батырҙар йыя башлайҙар, бик ныҡ әҙерләнәләр. Бөтә түрә-ҡаралар ошо эш менән була.

---

[1] Сығанаҡтарҙан күренеүенсә, Бейеш — реаль шәхес, Ҡыҙыл йылғаһы буйындағы Ҡусҡар ауылында йәшәгән (хәҙерге Әбйәлил р-ны). Фамилияһы — Ишкинин. — Асфандияров А. З. Прототипы образов трех исторических песен // Фольклор народов РСФСР. Межвузовский научн. сборник. — Уфа: БГУ, 1981. С. 151—163.

Бейеш батыр һәр көн юлдарын, эҙҙәрен яңылыштырып йөрөй. Төрлөсә кейенеп, ауылдарға, ҙур баҙарҙарға ла килеп сыҡҡылай. Ул бер ваҡыт Хәлил (хәҙерге Әбйәлил районы) баҙарына килә. Баҙарҙа көсө менән тирә-яҡта дан алған бер Ҡуштан батыр була. "Бейеш ҡараҡты күрһәм, уны тотоп алып, ҡул-аяҡтарын бәйләр ҙә, тештәрен кеҫәһенә һалып ебәрер инем", — тип маҡтана икән был. Уның һүҙҙәрен Бейеш ишетеп-тыңлап торған.

Бына теге батыр ҡайтыу юлына сыға, уның артынан Бейеш тә ҡуҙғала. Улар икеһе лә кырандастарына саҡ һыйып китеп баралар. Бер аҙҙан Бейеш тегене ҡыуып етә. Ҡуштан батыр: "Бейеш ҡараҡты беләһеңме?" — тип һорауға "Беләм", — тип яуаплай Бейеш.

— Ҡайҙа һуң ул ҡараҡ? Мин уның тештәрен йолҡоп, кеҫәһенә һалып ебәрәйем әле! — ти тегеһе.

— Бейеш батыр бына мин булам, — тигән Бейеш. Ике батыр алыша башлаған. Бейеш, тегенең аяҡ-ҡулдарын кырандаска ҡуша бәйләп, тештәрен берәм-берәм һурып алып, кеҫәһенә һалып ебәргән.

Бейеш Урал тауҙарында ҡая таштар араһында йөрөй бирә. Ул ҡайғы-һағыштарын йырлап йә ҡурайҙа уйнап тарата, үҙ күңелен үҙе йыуата.

Көндәрҙең береһендә Бейеш Урал тауы буйлап йөрөгәндә бер рус кешеһен осрата. Ул да ҙур кәүҙәле, киң яурынлы, мөһабәт кәүҙәле, етен сәсле, үткер күҙле ир икән. Улар бер-береһенә өнһеҙ-тауышһыҙ яҡын киләләр һәм үҙ-ара аңлашалар, танышып китәләр. Завод хужаһын үлтерә һуғып, Урал тауҙары буйлап ҡасып йөрөүсе Синцов фамилиялы эшсе икән был. Хәҙер улар икеһе бергә ҡасҡын булып йөрөй, байҙарға ҡаршы көрәшә, үс ала.

Олатайҙарҙың һөйләүенә ҡарағанда, Синцов Бейешкә ҡарағанда ла көслөрәк була. Ул 12 ботлоҡ батман, Бейеш батыр 8 ботлоҡ тимер лом алып йөрөй. Байҙарҙың магазиндарын талағанда йәки һарайҙан аттарҙы урлағанда, батманды ломға таяу итеп, йорт, һарай күтәрткәндәр. Талап алған аҡсаларҙы, затлы нәмәләрҙе ярлыларға таратҡандар.

Бер ваҡыт Бейеш Синцовтан айырылып, ауылдар буйлап сығып киткән. Ул бөтөнләй икенсе кейемдәр кейенеп ала, үҙен танымаҫтар, тип уйлай. Тик быны танып ҡалалар. Бай-түрәләр, күп халыҡ йыйып, батырҙы ҡыуа сығалар.

Бейеш, кырандасын туғарып, атын эйәрләй ҙә һыбай урманға, тау араһына ҡаса.

Ҡыуыусылар, яңынан-яңы аттарға атланып, Бейешкә яҡынлашалар. Батыр Иҙел башы менән Ирәмәл тауға менә башлай. Тегеләр бик яҡынлашкас, Бейеш, атынан төшөп, ҡая тау башына үрмәләп менеп китә. Эҙәрләүселәр ҡая таштың тирә-яғын һырып алалар, артынан үрмәләйҙәр. Бейеш ҡая башындағы бейек ҡарағас башына менә. Тегеләр быға төшөргә ҡушалар.

Батыр тереләй бирелергә теләмәй, шуға ла түбәнгә төшмәй. Ҡуштандар балта менән ҡарағасты тумыра башлай. Хәҙер Бейеш батырҙың башына бер уй килә. Ул йәйелеп үҫкән ике йыуан ҡарағас ботағын беләктәренә урап тота ла, йыуан ботаҡтарҙы айырып алып, уларҙы таяу итеп, Иҙел аша һикерә, ти. Бейеш Иҙелдең икенсе яғына осоп барып төшә икән дә, үҙен ҡыуып килеүселәрҙе мыҫҡыллы һүҙҙәр менән әрләп, йырлай-йырлай Урал урмандары араһына инеп юғала, ти.

Хәҙер инде Бейеш батыр байҙарға, түрәләргә ҡаршы тағы ла уҫалыраҡ көрәшә башлай. Уларға ҙур ҡурҡыу һала. Бейеш батырҙы эҙәрләйҙәр. Бер йылды ҡар иртә яуа. Эҙләргә сығыусылар аҡ ҡар

өҫтөндә Бейеш батырҙың эҙҙәрен табалар. Шул эҙҙәр буйлап йөрөй торғас, бер аҙҙан Бейеште табып, тотоп алалар. Күмәк көс батырҙы еңә. Ҡарттарҙың ҡайһы берәүҙәре, Бейеш батырҙы туҡмап үлтергәндәр, икенсе берәүҙәре, уны һөргөнгә ебәргәндәр һәм шул китеүҙән кире әйләнеп ҡайтмаған, тип һөйләйҙәр. Өсөнсөләре, уны тота алмағандар икән, тип тә әйтәләр.

Халыҡ араһында Бейеш сығарған йырҙар әле лә йырлана. Бына берәүһе:






Аҡ ҡуянҡайҙарҙан тун тектерҙем,
Тышҡынайын ниҙән [дә] тышлайым;
Йәйгелеген бында йәйләгәйнем,
Ҡышҡылығын ҡайҙа [ла] ҡышлайым?

(VII, 58—62.)

## 40. БИИШ-БАТЫР

"Бииш" - одна из любимых песен башкирского народа. В прежние времена в наших баймакских, абзелиловских краях люди старшего поколения после исполнения песни, как правило, рассказывали её краткую историю.

По их рассказам выходило, что Бииш - башкир наших баймакских или абзелиловских мест[1]. Он не задерживался долго на одном месте, большую часть жизни проводил на отрогах Ирендыка и Уралтау. Он не мог ужиться с разными начальниками-турэ и баями. Он их просто-напросто ненавидел. Одинокая жизнь научила его и петь, и играть на курае.

Был он из бедняцкой семьи. Тем не менее среди сверстников он выделялся и ростом, и силой. Его боялись даже подростки гораздо старше его. Во время игр или мальчишеских схваток, бывало, невзначай ушибал или даже ломал руки приятелям. Если это случалось с байчатами и они начинали хныкать и плакать, кара падала на голову родителей Бииша.

В десять-двенадцать лет он превратился в крепкого и сильного отрока, и за что бы он ни брался, все ломалось в его руках, которые были у него, будто лопаты, а кулаки - как половники. А в шестнадцать-семнадцать лет превратился в широкоплечего, смуглолицего красивого егета. Человек среднего роста рядом с ним казался мальчиком. В борьбе не было ему равных, многие боялись против него выходить.

Прошли годы, родители его стали стариться, а сам он нанялся к баю батраком. В работе он также

[1] Согласно документальным архивным материалам, Бииш - реальное лицо, житель дер. Кускарово по р. Кизил, фамилия его - Ишкинин. - Асфандияров А. З. Прототипы образов трех исторических песен // Фольклор народов РСФСР. Межвузовский научн. сборник. - Уфа: БГУ, 1981. С. 151-163.

## 40. BEIESH BATYR

'Beiesh' is one of the most loved songs of our folk. Our fathers and forefathers used to sing it, and then relate its story. As they told it, Beiesh was born here, in the Baimak, Abyalil area.[1]

Beiesh Batyr didn't live long in one village or one place. He spent much of his time roaming about the Ural and the Irandek mountains. For he couldn't get along with ignorant rich people, he couldn't bear them.

His parents were poor. Nevertheless, he was strong and healthy among the boys of his age. Even the boys, who were older than him, feared him a little. When playing or fighting with his friends Beiesh sometimes chanced to injure or break someone's limb. Beiesh's parents were always punished if a child of a rich family had complained or burst out crying.

By the age of ten or twelve he had become a stalwart boy. Whatever he touched, the thing would break at his touch. His hands were shovel size, his fists were like a scoop. By the age of sixteen-seventeen he had grown square shouldered and handsome. He had a dark-skinned radiant face, an eagle sight and a broad forehead. A man of medium hight would look like a kid beside him. No one could beat him at races and fights. Many batyrs were afraid to fight with him.

Beiesh's parents grew old. He went to work on the farm of a bai - rich man. He was good at work. He ate as much too. He could eat up a whole sheep for a meal, or a belt long strip of horse fat. 'Almost all you earn is wasted on your food,' said his master and paid him very little. So Beiesh beat his master and went away. That's why the bais tried to find a way to get rid of him.

[1] According to the documentary archive material Beiesh was a real person. His surname was Ishkinin, he lived in the village of Kuskar on the river Kythyl. - Асфандияров А. З. Прототипы образов трех исторических песен // Фольклор народов РСФСР. Межвузовский научн. сборник. - Уфа: БГУ, 1981. С. 151-163.

был сноровист. Умел и работать, и поесть: зараз мог справиться с целым бараном или съесть казылык, которым можно было опоясаться. "Ты съедаешь столько, сколько зарабатываешь", - говорили ему баи и платили очень мало. Тогда он порой не сдерживался, избивал скупого бая и уходил из его дома. В конце концов баи стали думать над тем, как избавиться от Бииша.

Так в нем зарождалась ненависть к ним, и он стал разделять всех людей на баев и бедняков. Между тем его родители умерли в бедности и нищете.

Бииш-батыр стал беглецом. Он мстил, грабя байское добро, разоряя царских чиновников, поджигая их дома. Награбленные деньги, разные хорошие вещи раздавал беднякам. Царские власти начали искать пути его поимки и уничтожения, называя не иначе как "Вор-Бииш".

Однажды байским сыщикам удалось напасть на след Бииша. Они настигли его в горах Ирендыка. Но батыр не растерялся, с корнем вырывая деревья, стал он бить своих преследователей. Те в ужасе бежали кто куда.

Бииш-батыр проводил свое время в скалистых горах Ирендыка и Уралтау, в густых лесах их предгорий. Днем он прятался, а по ночам вершил расправу над богачами. Каждый день он постоянно менял жилье, чтобы запутать свои следы. Бывало, в самых разных одеждах появлялся в аулах и на больших базарах.

Однажды Бииш оказался на базаре в деревне Халилово. Там он увидел Куштан-батыра, который славился своей силой. "Попадись мне разбойник Бииш, я бы связал его и выбил ему все зубы", - хвастался он. Бииш слышал эти слова. Когда тот батыр отправился домой, Бииш поехал за ним следом. Вскоре он догнал его. Куштан-батыр спрашивает его: - Ты знаешь разбойника Бииша?

Beiesh, in his turn, hated them too. His parents had died in poverty.

Beiesh turned into a fugitive. He took revenge of the rich and the chiftains, robbing them and burning their houses. The money and the valuable things obtained this way were given to the poor. The rich people tried to destroy him by all means. They called him 'thief.

One day they came upon his tracks. They met him in the Irandek mountains. The batyr didn't lose his head. Having cut some medium-size birch trees growing around, he rained blows on his enemies. The pursuers fled in panic.

Since then Beiesh batyr spent his days among the steep rocks and thick forests of the Ural and the Irandek mountains. At night he took revenge of the bais. Each day he took a different path. Dressed in different clothes, he would even appear in the villages at big markets.

One day he came to the market at the village Halil. There was a batyr there who used to show off, he was known in the neighbourhood for his strength. 'If I met that thief Beiesh, I'd catch him, tie up his legs and arms and fill his pocket with his teeth before I let him go,' he boasted. Beiesh stood there listening to his words.

When the batyr started on his way, Beiesh rose to follow him. There was hardly enough room for each of them in their carts. Soon Beiesh caught up with the man. 'Do you know Beiesh the Thief?' asked the man. Yes,' replied Beiesh. 'But where is he, that thief? I wish I could pull out his teeth and pour them into his pocket, indeed,' said the boastful man. 'Well, I'm the Beiesh batyr.' The two batyrs began wrestling.

Beiesh tied the man's legs and arms to the cart, pulled out his teeth one by one and put them into his pocket.

One day when roaming about the Ural mountains Beiesh met a Russian who had broad shoulders and a powerful build. His hair was flaxen and he appeared to

- Знаю, - говорит Бииш.

- Где же он? Выбить бы ему зубы да сложить ему в карман!

- Вот он перед тобой, я и есть Бииш-батыр.

И схватились два батыра. Бииш привязал Куштан-батыра к телеге, выбил ему зубы и сложил в карман.

Бииш продолжал проводить время среди каменистых скал Уралтау, изливал в песнях и в игре на курае свою грусть-тоску. Тем и тешил свою душу.

